ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

26-1 декабрь - ғинуар (аҡъюлай - һыуығай) 2015

№52 (678)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һаҡау итеп булһа ла...**

туған телдә һөйләш!



3

**Сәйхурбыҙ...**

тимәк, сәйҙең сифатлыһын эсәйек



8-9

**Башҡорт рухы феномены...**

Европаны бөгөн дә аптырата



11

**Ризыҡты үҙебеҙ бешерәйек!**



12

**ТВ-программа** 14

*Кемдер берәү әрләшә башлағас, әрләнеүсе ситкә китә. Әрләшеүсе уның артынан бара һәм: "Ниңә китәһең?" - тип һорай. Әрләнеүсе яуап бирә: "Һинең хоҡуғың - әрләшеү, ә минеке - тыңламау". Берәүгә һорау бирәләр. Ул яуап бирә алмай һәм әрләшә башлай. Уға шулай тип әйтәләр: "Әлбиттә, һиңә һорауға яуап биреүгә ҡарағанда, үҙ наҙанлығыңды йәшереү өсөн әрләшеү еңелерәк". Яман һүҙлеләр - ҡырағай йәнлектең иң хәтәре, ялағай һүҙлеләр - йорт хайуандарының иң ҡурҡынысы.*

*(Диоген).*

ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ




# ИХЛАС ҠОТЛАУҘАРҒА ЙӨРӘКТӘРҘЕ АСАЙЫҠ!

**Яңы йыл алдынан әйтелгән ихлас теләктәр тормошҡа аша, ти. Уның сере нимәлә, беләһегеҙме? Тап Яңы йыл байрамы алдынан еткерелгән теләктәрҙе беҙҙең үҙебеҙҙең ҙә ихласлап, уларҙың ысынлап та бойомға ашырына ышанып, мөғжизәләй күреп ҡабул итеүебеҙҙә. Шуның өсөн "Ихлас теләктәргә йөрәктәрҙе асайыҡ!" тип әйҙәләйбеҙ һеҙҙе.**

Даими уҡыусыларыбыҙ белә: гәзитебеҙҙә тап ошо Яңы йыл байрамы алдынан ғына "Әйҙәгеҙ..." тигән рубрикабыҙ пәйҙә була. Әйҙәләүҙәребеҙ бер аҡыллы геройҙың "Бәхетле булғың киләме? Бул, әйҙә!" тигән һүҙҙәре юҫығында. Бәхет тә, сәләмәтлек тә, уңыш та, күркәм холоҡло булып, хөрмәт ҡаҙанып йәшәү ҙә - барыһы ла үҙебеҙҙең ҡулда икәненә ишара бар был рубрикалағы сығыштарҙа. Уларҙы, моғайын, бушҡа аҡыл һатыу тип уйлағандар ҡабул итмәҫ, улар ысынлап та үҙҙәрен, тормоштарын үҙгәртергә теләгәндәргә, ышанғандарға төбәлгән.

Хәбәрселәребеҙҙең, авторҙарыбыҙҙың изге теләктәренә төрөлгән фекер-әйҙәләүҙәрен баҫмабыҙҙың үтеп барған йылдағы ошо һуңғы һанында ла, киләһе йылдың тәүге һанында ла уҡырһығыҙ. Беҙ шулай уҡ көнәлгәре РФ Президенты Владимир Путиндың, БР Башлығы Рөстәм Хәмитовтың, баш ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың, Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенконың ҡотлауҙарын һәм изге теләктәрен дә еткерәбеҙ һеҙгә. Уларҙың Яңы йыл ҡотлауҙары матбуғат баҫмаларында ташҡа баҫыла, радио-телевидение тулҡындарында яңғырай икән, тимәк, улар һәр йортҡа, һәр кем адресына төбәлә, тигән һүҙ. Йөрәктәрегеҙҙе асығыҙ бөтөн был изге теләктәргә. Йорттарығыҙ ишектәрен асығыҙ.

Йорт ишеге, тигәндән, иғтибарығыҙға бер риүәйәт: "Бер саҡ ҡатыны һәм ҡыҙы менән йәшәгән урмансы өйөнөң ишеген шаҡыйҙар. Асһалар, ишек төбөндә биттәре селтәр менән ҡапланған өс ҡатын-ҡыҙ торғанын күрәләр. "Беҙ Уңыш, Байлыҡ һәм Мөхәббәт булабыҙ. Һеҙ беҙҙең беребеҙҙе генә өйөгөҙгә индерә алаһығыҙмы?"- ти былар. Урмансының ҡатыны иренә һәм ҡыҙына ҡарап, "Мин Уңышты индерер инем, ул беҙгә эшебеҙҙе көйләргә ярҙам итер ине", ти. "Юҡ, - ти урмансы, - беҙ шул тиклем ауыр йәшәйбеҙ, әйҙәгеҙ, Байлыҡты индерәйек". "Зинһар өсөн, Мөхәббәтте индерәйек, мин күптән инде уның менән танышырға теләйем", тип үтенә ҡыҙҙары. Әсәй менән атай кәңәшләшәләр ҙә, ҡыҙҙарының теләген үтәргә, өйгә Мөхәббәтте индерергә ҡарар итәләр. Мөхәббәт өйгә инә. Ләкин уның артынан ҡулға-ҡул тотоношоп, Уңыш менән Байлыҡ та килеп инә..."

Беҙ әйтергә теләгәнгә тап килә һымаҡ был риүәйәттәге фәһемле фекер.

Тимәк... Уңыш толпарына атланыу ҙа, иңебеҙгә Бәхет ҡанаттары үҫтереү ҙә - барыһы ла үҙебеҙҙән, үҙебеҙҙең һайлауҙан, ниндәй дәрәжәлә ихтыяр көсө күрһәтеүҙән, ниҙе маҡсат итеүҙән тора. Көнитмешебеҙ, йән аҫырауыбыҙ беҙҙең теләктәребеҙ, аңыбыҙ, рухыбыҙ, ихтыярыбыҙ менән бәйле барыбер ҙә. Бына шуға ла, һәр кем күңелендә изгелек символы булып урын алған аҡ һаҡаллы Ҡыш бабайға ҡушылып, Яңы йыл алдынан уҡыусыларыбыҙға тағы ла "Әйҙәгеҙ!" тип дәртле өндәшәбеҙ. Әйҙәгеҙ, аңлы, рухлы, көслө ихтыярлы һәм оптимист булайыҡ! Әйҙәгеҙ, рәхмәтле, изгелекле, аҡ уйлы булайыҡ! Әйҙәгеҙ, яҡшылыҡтар көтөп, шул яҡшылыҡтарҙың күберәк булыуына үҙебеҙ ҙә булышлыҡ итеп йәшәйек! Әйҙәгеҙ, еңеүселәр булайыҡ!

Һәм тағы... Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе Яңы йыл менән ҡотлайыҡ!

Ҡотлаусыларҙың Ихласлығы, Йөрәк нуры, Һөйөүе һәм Хөрмәте күңелдәрегеҙҙе яҡтыртһын, донъяларығыҙҙы биҙәһен.

Яңы йыл кисендә көткән бар мөғжизәләр - Бәхет ҡошо ла, Сәләмәтлек тигән ҡорос арғымаҡ та, Мөхәббәт тигән серле тойғо-хис тә, Уңыш ғәли йәнәптәре лә, "Минең донъям" тигән күңел һиллеге лә, "Минең балаларым" тигән кинәнес тә, асмандарға аштырыр Хыял-ҡанат та, мул табындар ҙа, өҙәлеп көткән һәм көтөлмәгән шатлыҡлы осрашыуҙар ҙа - барыһы ла ҡаршы алып торһон Һеҙҙе яңы 2016 йыл тупһаһында.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

12+

✓ *Әлеге көндә мине башҡорт халҡының үҙаңын үҫтереү мәсьәләһе бик ныҡ борсой. Халыҡ үҙенең кемлеген, тамырҙары ҡайҙа, кемгә тоташыуын белергә, хәҙер ҡайҙа китеп барыуын аңларға тейеш.*

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЭШКӘ ТОТОНОРҒА ВАҠЫТ!

***Салауат ХӘМИҘУЛЛИН, тарихсы:*** Милләтебеҙҙең һәр улына һәм ҡыҙына үҙен ҡулға алып, эшкә тотонорға ваҡыт. Тимәк, өҫтән кемдер килеп, барыһын да яйға һалыр, мәсьәләләрҙе хәл итер, тормошобоҙҙо яҡшыртыр, тип өмөтләнеүҙе туҡтатырға кәрәк. Барлыҡ яуаплылыҡты дәүләт үҙ елкәһенә алған заман күптән үтте бит инде. Бөгөнгө көндә бары тик үҙебеҙгә генә таянырға була һәм был халыҡтан ойошҡанлыҡ, берҙәмлек талап итә. "Минең өсөн халыҡ нимә эшләне әле?" тигән һорау биргәнсе, "Мин халыҡ өсөн ниндәй ғәмәлдәр атҡарҙым әле?" тип һорарға кәрәк. Бөтә эште бына ошонан башлау мөһим.

Әлеге көндә мине башҡорт халҡының үҙаңын үҫтереү мәсьәләһе бик ныҡ борсой. Халыҡ үҙенең кемлеген, тамырҙары ҡайҙа, кемгә тоташыуын белергә, хәҙер ҡайҙа китеп барыуын аңларға тейеш. Был махсус белемһеҙ мөмкин түгел, сөнки беҙҙән рациональ фекер йөрөтөү һәм үҙебеҙгә файҙалы нәмәләргә, милләт мәнфәғәтен юғары ҡуйған эштәргә өҫтөнлөк бирә белеү талап ителә.

Берҙәмлек кәрәк, тибеҙ, ә берҙәмлеккә илткән тәүге аҙым һәр кеше ниндәй ҙә булһа өлкәлә берәй эш башлағанда яһала. Йәғни, әгәр ҙә һин ниндәй файҙалы эш эшләргә кәрәк булыуын белһәң, был ғәмәлгә үҙең башлап тотон. Фекерҙәштәр һәм ярҙамсылар, һинең менән бергә эшләргә, милләтте алға этәрергә теләүселәр эшеңдең әһәмиәтен күреп, мотлаҡ килеп ҡушыласаҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

*ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ*

# ТЫМЫҠ ДЕКАБРЬ, ҠАРЛЫ ҒИНУАР...

## һәм буранлы февраль

**Көҙ нисек кенә ҡаршылашмаһын, ҡыш яйлап үҙ хоҡуҡтарын яулай башланы. Әкиәти донъяны хәтерләткән был миҙгел үҙенең матур байрамдары менән һәр кемдең күңеленә яҡын. Ап-аҡ ҡарға төрөнгән ер ҡышҡы йоҡоға талып, яҙғылыҡҡа үҙенә көс-ғәйрәт йыя. Тормош та был миҙгелдә үҙенең һиллеге, тыныслығы, әкрен ағыуы менән айырылып тора. Уҙып барған декабрь, уны ҡыуып килгән ғинуар һәм февраль беҙгә ниндәй һауа торошо әҙерләй? Ошо хаҡта үҙенең күҙәтеүҙәре менән Бөрйән районы Ҡотан ауылында йәшәүсе фенолог Алмира ХӨСНӨТДИНОВА бүлешә.**

- Элегерәк декабргә көрткә батасума килеп инһәк, хәҙер ҡыштың тәүге айын ҡарһыҙ тиерлек үткәреп ебәрергә өйрәнеп тә барабыҙ. Айырыуса айҙың башы ҡарһыҙ, йылы булыуы менән айырылып тора. Быйыл да был ҡағиҙә боҙолманы һәм айҙың тәүге аҙналарында ҡар бөртөктәренең ерҙе тулыһынса ҡаплауын күреп булманы. Ғөмүмән, декабрҙең мул яуым-төшөм менән ҡыуандырмаясағы июндә үк билдәле ине: ул саҡта ямғырлы көндәр бик һирәк булды бит. Ләкин июнь һуңында ямғырҙың етерлек яуыуы Яңы йылды ҡарлы декабрь менән ҡаршы алыуға өмөт уята.

Декабрҙең тәүге ҡары епшек, ауыр булып ергә ятты, тимәк, киләһе йәйҙең дымлы булыуын көтөргә кәрәк. Миләштең күп булыуы ҡарҙың әҙ буласаҡ икәнен белдерә. Июнь көслө еле, хатта дауылдары менән хәтерҙә ҡалды. Тимәк, ҡыш башында ла ошондай уҡ һауа торошон көтөргә кәрәк.

Ғинуар башы ҡарлы, буранлы буласаҡ, тип фаразлайым. Шул уҡ ваҡытта үҙәккә үтерлек һыуыҡтар көтөргә кәрәкмәй. Тәбиғәт беҙгә Яңы йыл уңайынан бирелгән ялдарҙа күберәк саф һауала йөрөү, алыҫ араларға ҡунаҡҡа сығыу мөмкинлеге бирәсәк. Ләкин ҡыш барыбер үҙенең холҡон күрһәтәсәк - ай уртаһында термометрҙың терегөмөшө аҫҡа тәгәрәйәсәк. Был ваҡытта 20-25 градустан да түбәнерәк һыуыҡтарға әҙер булырға кәрәк. Ай һуңы ҙур күләмдәге ҡарҙары, әсе елдәре һәм көслө һалҡындары менән киләсәк.

Февраль - ҡыштың һуңғы айы. Был ваҡытҡа кеше һыуыҡтарҙан ялҡып, йылы көндәрҙең тиҙерәк етеүен түҙемһеҙләнеп көтә башлай. Ләкин ҡыш февралдә ялға китергә теләмәйенсә айырыуса тартҡылаша - көндәр тағы ла нығыраҡ ҡырыҫлана. Элек-электән февраль үҙенең ыжғыр бурандары һәм йонсоу көндәре менән билдәле. Быйылғы февраль башы ла һыуыҡ, елле, ҡарлы-буранлы буласаҡ. Ай уртаһында сағыштырмаса тынлыҡ урынлашһа ла, һыуыҡ көндәр битте семетәсәк әле. Ләкин был айҙың һыуыҡтары даимилыҡ менән айырылмай, йәғни бер көн үтә лә һалҡын булһа, икенсе көнөнә йылытып ебәрергә лә мөмкин. Ай аҙағында күпләп ҡар яуыуы, көндәрҙең болотло тороуы көтөлә. Ғөмүмән, февраль "ике йөҙлө", ул үҙенә ҡышҡы һалҡынды ла, яғымлы йылыны ла һыйындыра. Тимәк, был айҙа һауа торошо төрлө көтөлмәгәнлектәр бүләк итергә мөмкин.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**



# МАЙМЫЛ ЙЫЛЫНА

*Алышайыҡ тарихтағы*
*Урындар менән.*
*Ахыры, мине бар итмәнең,*
*Бар булдың минән.*

*Дарвин яҙа - ризыҡ эҙләп*
*Маймыл тир түккән.*
*Шул арҡала аң-белеме*
*Үҫешкән икән.*

*Тура баҫып кеше булып*
*Йәшәй башлаған.*
*Маймылға хас ҡылыҡтарҙан*
*Биҙгән, ташлаған...*

*Бөгөн хәлдәр шаҡ ҡатырлыҡ -*
*Үҙгәрҙе кеше.*
*Маймыл булып ҡыланыуҙар*
*Буғай, бар эше.*

*Парламентта ла маймылдай*
*Депутаттар бар.*
*Хас та маймыл әртистәргә*
*Сәхнә түре тар.*

*Үрмәләйҙәр түрәлектең*
*Иң-иң түренә.*
*Ундайҙарҙың асыҡ арты*
*Йыраҡ күренә...*

*Маймыл йылы, бир кешегә*
*Ысын баһаһын.*
*Үҙ асылын онотмаһын*
*Алла балаһы.*

*Көн-төн тимәй, түкһен тирен*
*Кешелек өсөн.*
*Шулай ғына һаҡлап була*
*Аң-белем көсөн.*

**Тимер НИӘТШИН.**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Дәүләт советы ултырышы йомғаҡтары буйынса журналистар менән аралашыуҙа, һуңғы йылдарҙа республика балалар йорттарында тәрбиәләнеүсе етемдәр, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар һаны ике тапҡырға кәмене, тип белдерҙе. "Әгәр өс-дүрт йыл элек балалар йорттарында ике меңдән ашыу бала булһа, бөгөн иһә мең самаһы, - тине ул. - Беҙ муниципалитеттар, ҡала округтары менән берлектә тәрбиәгә бала алыусы ата-әсәләр эҙләйбеҙ. Был йәһәттән хәлдәр яҡшырыр, тип уйлайым. Тағы 20-гә яҡын балалар йорттары бар. Был беҙҙең өсөн яҡшы статистика..."

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Инвестиция мөхитен яҡшыртыу буйынса йәмәғәт советы ултырышы үткәрҙе. Әлеге ваҡытта бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа иғтибарҙы йүнәлтеү мөһим, тип билдәләне республика Башлығы. Ултырыш барышында Рәсәй субъекттарында Инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингы һәм Конкуренцияны үҫтереү стандартының иң яҡшы тәжрибәләрен индереү буйынса саралар, шулай уҡ белем биреү объекттарын төҙөү проекты тикшерелде.

✓Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Сергей Молчанов республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы. Мәҙәниәт, төҙөлөш, ауыл һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, физкультура, һаулыҡ һаҡлау, фән өлкәләрендә, министрлыҡ һәм ведомстволарҙа эшләгән 46 хеҙмәткәрҙең һөнәри ҡаҙаныштары почет грамоталары, маҡтаулы исемдәр, рәхмәт хаттары менән билдәләнде.

✓Рәсәйҙең Пенсия фонды һәм Рәсәй почтаһы Яңы йыл алдынан пенсия һәм башҡа социаль түләүҙәрҙе махсус тәртип буйынса таратыу хаҡында килеште. Айҙың 1-нән 3-нә тиклем пенсия һәм социаль түләүҙәр алыусылар уны 2015 йылдың 29 декабрендә үк аласаҡ. 4 ғинуарҙан түләүҙәр почта элемтәһе бүлексәләренең эш графигына ярашлы таратыла. Ғинуарҙа кредит учреждениеларында (банктарҙа) үҙ иҫәбенә пенсия һәм социаль түләүҙәр алыусы пенсионерҙарға аҡса ғәҙәти график буйынса бирелә.

✓Башҡортостанда хеҙмәт мигранттары дәүләт ҡаҙнаһын 419 миллион һумға тулыландырған. Федераль миграция хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың 11 айында 26 меңдән ашыу сит ил кешеһе - хеҙмәткә патент, 1270-е эшкә рөхсәт алған. Һөҙөмтәлә республика бюджетына 400 миллион һум ингән.

ӘЙҘӘ, ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!

**Өфө ҡалаһында матур, рухлы башҡорт ғаиләһе йәшәй. Туптай өс ул үҫтерә улар. Сабыйҙар телдәре асылған ваҡыттан алып рәхәтләнеп туған телдә һөйләшә. Хоҙай тарафынан уларға ошо телдең хужалары булыу яҙған, кинәнеп бытылдайҙар. Был ғәҙәти хәл. Быға аптырарға ла, ғәжәпләнергә лә ярамай. Бүренең көсөктәре тыуғас та әтәс булып ҡысҡыра башламай ҙа баһа!**

# ҺАҠАУ ИТЕП БУЛҺА ЛА...

## туған телдә һөйләш!



Ләкин беҙ күп милләтле, ике тел дәүләт теле булған республикала йәшәйбеҙ. Балалар өйҙән сығыу менән уларҙы рус телле мөхит ҡаршы ала. Әлбиттә, әлеге башҡорт ғаиләһе менән дә шулай килеп сыға. Бер-бер артлы ике оло малайҙары баҡсаға йөрөй башлай. Сабыйҙар бер йәһәттән дә ҡалышмай, кинәнеп уйнай, тиҫтерҙәре менән аралашалар. Ни бары һөйләшкәндә ҡайһы бер хәрефтәрҙе генә дөрөҫ әйтмәйҙәр. Был күренеш күпселек балаларҙа осрай торған хәл. Үтә тәжрибәле логопед менән шөғөлләнгән хәлдә төҙәтелә торған мәсьәлә.

Балалар баҡсаһында ниндәйҙер комиссия ойошторола һәм әлеге башҡорт балаларын, рус теле менән бер рәттән башҡорт телендә лә һөйләшкән өсөн телмәрҙәрендә үҫеш тотҡарлыҡтары киҫерәләр, тип, логопедик төркөмгә күсерәләр. Был хәл ата-әсәне бөтөнләй аптырауға һала. Ул төркөмгә күсеүҙән файҙаһынан башҡа зыяны ла булмаҫ, бәлки, әммә ошо факт, тап үҙ телеңде өйрәтеүҙән етешһеҙлек табыу аптырата быларҙы. Ул төркөмгә тап ике телле балаларҙы ғына туплайҙар икән. Русса телмәре үҫешмәгән татар, башҡорт балаларын. Ҡала шарттарында сабыйыңа сәңгелдәктән телгә һөйөү уятырға тырышып үҫтер ҙә, күпмелер ваҡыт үткәс, кемдәрҙер "Һеҙ яңылышҡанһығыҙ, киреһенсә, балаға зыян ғына эшләгәнһегеҙ", тип белдергән кеүегерәк килеп сыға түгелме был? Өйҙә тик башҡортса ғына һөйләшеп, үҙ телебеҙҙә сыҡҡан китаптар һатып алып, матбуғатҡа яҙылып, туған йыр-моңдарҙы тыңлап йәшәү хата булып сыға икән дә!

"Беҙҙә, өйҙә башҡортса һөйләшегеҙ, тәрбиә - ғаиләнән, тип күп һөйләйҙәр. Ләкин ул бала урамға сыҡҡас, үҙен нисек тоторға, баҡса-мәктәптәрҙәге шарттарға нисек яраҡлашырға тейеш - был турала һүҙ юҡ", - ти әсенеп өс малай әсәһе. Ысынлап та, барса башҡорт балаһын да 20-се ҡала башҡорт гимназияһына йөрөтөп тә булмай бит. Билдәле булыуынса, бары тик ошо гимназияға ғына башҡортса яҡшы һөйләшкән балаларҙы һайлап алырға тырышалар. Тап унда ғына өйөндә туған телендә аралашып үҫкән бәләкәс үҙен һыуҙағы балыҡтай хис итә кеүек. Башҡорт балалар баҡсаларына ла, бүтән баҡсаларҙың башҡорт төркөмдәренә лә тик башҡортса ғына һөйләшкән сабыйҙар алынмай. Һөҙөмтәлә, өс йәки ете йәшенә саҡлы тик туған теле моңон ғына ишетеп үҫкән сабый сит мөхиттә көсөргәнеш кисерә. Был хәл булмаһын өсөн өйҙә нисегерәк тәрбиәләргә, ике телде лә бер рәттән өйрәтергәме-юҡмы - ата-әсә белмәй.

Әлеге атай менән әсәй Өфө буйлап башҡортса һөйләшкән логопед эҙләй башлай. Таба алмайҙар. Аптырап, рус телләләренә мөрәжәғәт итеп ҡарайҙар. Улар русса белмәгән бала менән эшләүҙән баш тарта йә тиҙ арала русса өйрәтергә, туған телен онотторға ҡуша. Илле алла менән, тартып-һуҙып ҡына башҡортса һөйләшкән логопед ҡыҙ табыла. Әммә ул да тәүге шарты итеп күпмелер ваҡытҡа өйҙә башҡорт телендә һөйләшеүҙе туҡтатып тороуҙы ҡуя.

Белеүегеҙсә, бөгөн төпкөл генә башҡорт ауылдарында ла сабыйҙар бытылдап русса һөйләшергә әүәҫләнде. Быны баланың көнө буйы йәнһүрәт ҡарап ултырыуынан, компьютер уйындарына текәлеүенән тип аңлатырға мөмкин. Шулай ҙа логопед арҡаһында тыуған "урыҫтар" ҙа юҡ түгел икән. Мәҫәлән, Салауат районының бер ауылында дүрт йәшенә саҡлы теле асылмаған сабыйҙы логопедҡа күрһәтәләр. Ата-әсәһе, олатай-өләсәләре саф башҡорт булған, ошо телдә генә һөйләшкән кешеләрҙең балаһы русса ғына һөйләшә башлай. Бөтә байрамдары ла русса үтә, ул аңлаһын өсөн ошо телдә генә аралашалар. Ололар үҙ-ара ғына башҡортса гәпләшә. Ә был бер генә миҫал түгел.

"Башҡортса өйрәтәйек, һөйләшәйек, тип күп яҙыла һәм һөйләнелә. Әммә телде һаҡлап ҡалыу өсөн ниндәй кимәл кәрәк? Икмәк-тоҙлоҡ ҡынамы, әллә әҙәби тел юғарылығындамы - быныһы ла билдәһеҙ", - тигән һорауҙы ла ҡуя өс бала әсәһе.

Атә-әсә хәҙер түләүле үҙәккә йөрөтөп, оло малайҙарына *ш, с* кеүек өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтә. Әммә *ғ, н, ҙ* өндәрен ҡайҙа һәм кемдән ҡуйҙырырҙар - билдәһеҙ...

**Гөлсинә ЙОСОПОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҮҘЕБЕҘ ӨЛГӨ КҮРҺӘТӘЙЕК!

**Яңы йыл алдынан төрлө пландар, тормошто ҡырҡҡа үҙгәртеү тураһындағы уйҙар, ниндәйҙер шөғөлгә ныҡлап тотоноу хаҡындағы ниәттәр ҡороу күптәрҙең "ятраҡан" эше. Тик бик һирәктәр генә алдарына ҡуйған маҡсаттарҙы үтәү өсөн үҙендә рухи көс, ынтылыш һәм теләк таба, ә ҡалғандар уны киләһе йылға күсерә барып, ғүмер үткәнен дә һиҙмәй ҡала.**

Мин үҙем дә әлегә тиклем пландарҙың "кәрәген биргәнсе" ҡороу этабынан артабан үтмәй инем. Күпме ваҡыт икенсе йыл спорт менән шөғөлләнә башлайым, алдағы йәй мотлаҡ рәүештә республиканың бер-ике урынына сәйәхәт ҡылам, ниндәй ҙә булһа курстарға йөрөйөм, тигән һәм башҡа ошондай уй-ниәттәрем Яңы йыл төнөндә үк, бенгал уты менән бергә, ирей юҡҡа сыға килде. Бына быйыл да күпме хыялланған Ирәмәл тауына барырға форсат һәм яй тапмай йәйҙе үткәрҙем. Спорт залына йөрөй "башлауым" да магазиндан махсус кейем һатып алыуҙан ары китмәне. Ләкин күпселек дуҫтарымдың да ошондай уҡ хәлгә зарланыуына шаһит булыуым үҙемде ҡулға алырға һәм идея тоҡандырыусынан уны тормошҡа ашырыусы роленә күсергә этәрҙе.

Иң тәүҙә тренажер залына абонемент һатып алдым. Ә аҡсаһы түләнеп, кеҫәгә инеп ятҡан ҡағыҙ булғас, тәғәйен көндә, теләр-теләмәҫ кенә спорт залына юлландым. Ләкин беренсе көндә үк шөғөлләнеүҙән алған позитив тойғолар, башты әйләндерерлек адреналин, яңы кешеләр менән танышыу күптән бында килмәүемә үкенеү хистәре уятты. Минең шәхси өлгө дуҫтарымды ла ҡыбырлатып ебәрҙе - хәҙер тиҫтәләгән иптәшем спорт залында шөғөлләнә.

Ә Ирәмәлде барыбер яуланым! Йәйгеһен баҙнат итмәгәнде, ҡышҡы һыуыҡта, ап-аҡ ҡарҙы йырып юл һала-һала тау үренә менеп етерлек көс таптым үҙемдә. Теләк көслө булһа, юлы асылып ҡына тора икән дә. Әлегә тиклем ваҡыт юҡлығына һылтанып йөрөүселәр ҙә минең тауҙан ниндәй ҙур тәьҫораттар менән ҡайтыуымды күргәс, фото менән генә хушһынмай, үҙҙәре лә Ирәмәлгә барып ҡайтты. Ирәмәлдә бер булған кешенең унда тағы ла барғыһы килеүен ишеткәнем бар ине. Ысынлап та, хәҙер түҙемһеҙләнеп йәйҙе көтәбеҙ һәм бергәләп мотлаҡ йәйге Ирәмәлде лә күрәсәкбеҙ, тип үҙебеҙгә вәғәҙә бирҙек.

Күптән күңелемдең иң түрендә йөрөткән хыялымды ысынбарлыҡ иттем - һүрәт төшөрөү түңәрәгенә йөрөй башланым. Үҙемдә рәссамлыҡ һәләтен әллә ни тоймаһам да, ни өсөндөр, буш ваҡыттарымда аҡ ҡағыҙ һәм ҡәләм алып, нимәлер сыймаҡлап маташа инем. Ләкин махсус белем етмәү сәбәпле, һүрәттәремдең "ғүмере" бик ҡыҫҡа булды. Ә хәҙер уларҙы ҙур ғорурлыҡ менән өй стенаһына элеп ҡуйҙым, дуҫтарыма күрһәтеп сыҡтым - тик маҡтау һүҙҙәре генә ишеттем. Улай ғына ла түгел, таныштарымдың да күбеһе әлегә тиклем асып һалырға ҡыймаған хыялдарын тормошҡа ашыра башланы. Бына бит ул шәхси өлгө көсө. Шуға ла "Киске Өфө" гәзитен уҡыусы һәр кемгә яҡшы эштәрҙә кемгәлер матур өлгө булыуҙарын теләйем.

**Дим ДӘҮЛӘТБӘКОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2016 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостанда балалар баҡсалары өсөн түләүҙәр үҙгәрә, әммә әллә ни артмай. Яңы йылда республикалағы мәктәпкәсә учреждениеларҙа балаларҙы ҡараған өсөн түләү уртаса 1440 һум тәшкил итәсәк. "Ошо сумманан (1440 һум) түләүҙе кәметеүгә компенсация түләүҙәре күләме иҫәпләп сығарыла. Ата-әсәләр балалар баҡсалары өсөн түләүгә компенсацияға хоҡуҡлы. Бер балаға - түләнгән сумманан 20 процент (288 һум), ике - 50 процент (720 һум), өс һәм унан күберәк - 70 процент (1008 һум)", - тип аңлатма бирҙеләр төбәктең мәғариф ведомствоһында.

✓Тегеранда Башҡортостандың Үҫеш корпорацияһы Ағиҙел ҡалаһының индустриаль паркы менән таныштырҙы. Индустриаль парк Ағиҙел ҡалаһында, Өфөнән 175 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Бындай сара тәүгә ойошторола. Проектҡа илдең сәнәғәт һәм сауҙа министры Денис Мантуров етәкселек итә. Күргәҙмә дүрт мең квадрат метр майҙанды биләй. Рәсәйҙең 35 компанияһы үҙҙәренең эштәрен һәм экспонаттарын тәҡдим итә.

✓Ағымдағы йылдың ғинуар-ноябрь айҙарында Башҡортостандың тупланма бюджеты 6,74 миллиард һумлыҡ профицит менән үтәлгән, тип хәбәр итә республиканың Финанс министрлығы. 2015 йылдың 1 декабренә килемдәр 161,76 миллиард һум тәшкил иткән, 2014 йылдың ошо уҡ осорона ҡарата 10,1 процентҡа күберәк. Сығымдар 155,02 миллиард һум күләмендә финансланған. Сығымдар структураһында социаль йүнәлеш өҫтөнлөк итә - сығымдарҙың 75,8 проценты, йәғни 117,51 миллиард һум.

✓Өфө дәүләт нефть техник университеты терәк университет исеменә дәғүә итә. Ул илдең 14 юғары уҡыу йорто менән бергә конкурс буйынса һайлап алыуҙа ҡатнаша. Улар араһында Өфө вузынан тыш, Волгоград һәм Дағстандан - икешәр, Воронеж, Вятка, Дон, Кострома, Омск, Ырымбур, Орел, Һамар, Себер һәм Төмән университеттары бар. Конкурс еңеүселәре 2016 йылдың 1 февраленә тиклем билдәләнә.

✓Башҡортостанда урмансылар байрам өсөн 70 мең ағас әҙерләгән. Шуларҙың 44 меңе - ҡарағай, 16 меңе - аҡ шыршы, 10 меңе - шыршы. Йылайыр, Маҡар, Бәләбәй, Нуриман һәм Стәрлетамаҡ урман хужалыҡтары хеҙмәткәрҙәре айырыуса әүҙем эшләне. Өфөлә шыршы баҙарҙарында ағастың уртаса хаҡы - 600 һум.

**“Башинформ”дан.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТАУЫБЫҘҘА ЙЫЙЫЛАЙЫҠ!

**Яҙғы һабан эштәре тамамланыу менән һәр районда һабантуйҙар үтә. Быйыл Ишембай районы һабантуйы Аҙнай ауылы эргәһендә үтһә лә, күптәнге гәҙәт буйынса, Торатауға яҡын йәшәгән ауылдар халҡы Торатау итәгенә йыйылдыҡ. Тауҙың түбәһенә менеп, ҡул һуҙырлыҡ аралағы ауылдарға һоҡланып, көнделәребеҙгә йәшәү көсө, дәрт өҫтәп, йырлашып-бейешеп, рәхәтләнеп ял итеп ҡайттыҡ.**

Мин Әхмәр ауылында тыуып, ошо ауылда урта мәктәпте тамамланым. Әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтҡас, элекке "Химзавод", аҙаҡтан "Каустик" тип аталған заводта 41 йыл эшләп, орден-миҙалдарға лайыҡ булып, хаҡлы ялға сыҡтым.

Бәләкәй саҡта тәүге тапҡыр Торатауҙы күрергә барыуым һаман да хәтерҙә. Ул ваҡытта мәктәпкә уҡырға төшмәгәйнем әле. Минән 2 йәшкә өлкән күрше малайы Тәлғәт 1 Май байрамы көндө Торатауға барырға тәҡдим итте. Тау башындағы майҙанға йыйылған халыҡты, уларҙың йырлауын, бейеүен, уйындар уйнауын бик күргем килде. Был хаҡта әсәйемә әйткәс, ул мине, аяғыңда ла юҡ, ас көйөнә барып етә алмаҫһың, тип, кире өгөтләп маташты. Бик тә ныҡышҡас, ике йомортҡа бешереп бирҙе һәм: "Кара уны, йомортҡаларҙы Торатауға менеп еткәс кенә аша, юғиһә, ҡайтып етә алмаҫһың. Ҡайтҡанда, берәйһенең арбаһына эләгергә тырыш", - тип, фатихаһын биреп оҙатып ҡалды. Беҙ, баласағалар, ауылыбыҙҙан биш километр алыҫлыҡта ятҡан Торатауға барып етеп, көс-хәл менән тау башына менеп еттек. Ниндәй наҡыҫ замандa ла халыҡтың шундай күнелле ял итә белеүенә әле лә хайран ҡалам. Әсәйем ҡушҡанса, тау башында йомортҡаларҙы ашап, унын төньяҡ һыртында һаман да иремәй ятҡан ҡар менән һыуһыңды ҡандырғас, шаярып, арып-талып, ҡайтыу яғына ыңғайланыҡ...

Быны шулай, Әхмәр, Ҡанаҡай, Сәлих, Әптек, Ишәй, Урман Бишҡаҙаҡ, Яр Бишҡаҙаҡ, Ҡарайған, Йәнрыҫ, Янғыҙҡайын һәм башҡа ауылдар, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат ҡалалары халҡы 1 Май байрамында Торатауға артыла ине. Тау башында мөхәббәтен осратып, туғанлыҡ тамырҙары менән ауылдарҙы бер-беренә бәйләп ҡуя инеләр. Әлбиттә, был йола әле лә атҡарыла. Тик бына әлеләнән-әле ошо изге тауыбыҙға яҫҡыныуҙар эсте бошора. Хоҙай барыһын да күрә, ишетә, тиҙәр бит. Беҙҙең борсолоуҙар ҙа барып етер Уға, иншалла. Халыҡтарҙың дуҫлығын, туғанлығын нығытыусы изге тауыбыҙ йәштәр өсөн - мөхәббәт, ҡарттар өсөн иҫтәлектәр тауы булып, һәр байрамда үҙенә саҡырып торһа ине артабан да. Тормош мәшәҡәттәрен онотоп, әүҙем йыйылып, Торатау буйында байрамдар үткәреп торайыҡ, көс - халыҡтың берҙәмлегендә икәнен онотмайыҡ.

**Зөфәр АБДРАХМАНОВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЛАЙЫҠЛЫЛАРҒА ЛАЙЫҠЛЫ БАҺА



**Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич Башҡортостан вәкилдәренә дәүләт наградалары тапшырҙы.**

Волга буйы федераль округының барлыҡ төбәктәренән 22 кеше ордендар, миҙалдар һәм маҡтаулы исемдәр менән билдәләнде. Бүләкләнеүселәр араһында төрлө тармаҡ вәкилдәре: энергетиктар, нефтселәр, табиптар, машина эшләүселәр, химиктар, иҡтисадсылар, ауыл хужалығы, транспорт, аҙыҡ-түлек индустрияһы хеҙмәткәрҙәре, дәүләт власы органдары етәкселәре бар.

Быйыл Волга буйы федераль округы яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәште, тип билдәләне Михаил Бабич. Атап әйткәндә, июль айында Өфөлә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС илдәре берләшмәһе саммиттары юғары кимәлдә уҙҙы. Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Сергей Молчанов, Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов саммиттарҙы юғары кимәлдә үткәргәне өсөн Дуҫлыҡ ордендары менән бүләкләнде. Шулай уҡ "Востокнефтезаводмонтаж акционерҙар компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Хәлит Бикмөхәмәтов хеҙмәттә өлгәшкән уңыштары, әүҙем йәмәғәт эшмәкәрлеге һәм оҙаҡ йылдар намыҫлы эшләгәне өсөн Дуҫлыҡ орденына лайыҡ булды. Кеше ғүмерен ҡотҡарыуҙа күрһәткән ҡыйыулығы өсөн бүләкләнеүселәрҙә Михаил Бабич айырыуса билдәләп үтте. Мәҫәлән, тулы хоҡуҡлы вәкил Башҡортостандан Арсен Байғусҡаровҡа "Һәләкәткә осраусыларҙы ҡотҡарған өсөн" миҙалын тапшырҙы. 2014 йылдың йәйендә егет йылғала батып барыусы алтынсы класс ҡыҙҙарын ҡотҡарған.

Тантана һуңында Михаил Бабич барыһын да етеп килгән Яңы йыл менән ҡотланы, бүләкләнеүселәргә һәм уларҙың ғаиләләренә тағы ла бер тапҡыр рәхмәт белдерҙе. "Ошо наградаларҙа һеҙҙең ғаилә ағзаларының да өлөшө ҙур. Улар һәр ваҡыт янығыҙҙа һәм һеҙгә ярҙам итәләр, шуға күрә уларға ҡотлауҙарымды еткерегеҙ", - тип билдәләне Президенттың Тулы хоҡуҡлы вәкиле.

# БАЙРАМДАР - БАЛАЛАРҒА



**Өфөнөң "Башҡортостан" дәүләт концерт залында республика Башлығы шыршыһына төбәктең ҡала һәм районданрынан 780 уҡыусы йыйылды.**

Байрамға уҡыу алдынғылары, мәктәп олимпиадаларында, фестивалдәрҙә, конкурстарҙа, спорт ярыштарында еңеүселәр, хеҙмәт бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрбиҙәрҙең һәм эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренең, аҙ тәьмин ителгән ишле ғаиләләрҙең балалары саҡырылғайны. Төп Яңы йыл байрамында артистар Ҡыш бабай һәм әкиәт геройҙары менән балалар өсөн шыршы тирәләй әйлән-бәйлән уйнаны.

Республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов уҡыусыларҙы Башҡортостан Башлығы исеменән ҡотланы. "Әлеге мәлдә һеҙҙең төп бурысығыҙ - белем алыу, уҡыуҙа яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү. Ошо залда ултырыусыларҙың барыһы ла йыл дауамында тырышҡан һәм эшләгән. Хәҙер иң яҡшыларҙың-яҡшыһы булыуығыҙға ышанам - был һеҙҙең тәүге аҙымығыҙ. Ул киләсәктә һөнәр һайлауға булышлыҡ итәсәк. Республика Башлығы, Башҡортостан Хөкүмәте исеменән етеп килгән 2016 йыл менән ҡотлайым, мөғжизәләргә һәм теләктәрҙең тормошҡа ашыуына ышанығыҙ", - тип мөрәжәғәт итте Салауат Сәғитов балаларға.

Шулай уҡ уҡыусылар "Яңы йыл биттәре буйлап, йәки Әкиәт урлаусылар" тигән театрлаштырылған тамаша ҡараны. Һуңынан муниципаль районданрҙан килгән балалар өсөн "Салют" һауыҡтырыу лагеры ашханаһында байрам ашы ойошторолдо. Яңы йыл шыршыһы тураһында иҫтәлеккә уҡыусыларға йомшаҡ уйынсыҡтар - йылдың билдәһе булған Маймыл, "Донъя әкиәттәре" китабы һәм татлы тәмлекәстәр тапшырылды. Артабанғы көндәрҙә шул уҡ "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Баш ҡала һәм Социаль шыршы байрамдары үтте. Сараларға йыйылған 1700-ләп баланы Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов исеменән уның урынбаҫары Сынтимер Баязитов ҡотланы.

# ИМЕНЛЕК - БЕРЕНСЕ УРЫНДА

**Башҡалабыҙ Өфө өс йыл рәттән Рәсәй субъекттарының административ үҙәктәре араһында халыҡтың йәшәйеш именлеген тәьмин итеү өлкәһендә Волга буйы федераль округы буйынса иң яҡшы ҡала исеменә лайыҡ була.**

"Йәшәйеш именлеген тәьмин итеү өлкәһендә иң яҡшы урындағы үҙидара органы" исемле смотр-конкурс йомғаҡтары буйынса дипломдар Киров ҡалаһында тапшырылды. Йыл һайын был бәйгене Рәсәйҙең Граждандар оборонаһы эштәре, ғәҙәттән тыш хәлдәр һәм бәлә-ҡаза эҙемтәһен бөтөрөү буйынса министрлығының Волга буйы төбәк үҙәге ойоштора. Башҡортостандың икенсе ҡалаһы - Нефтекама - ҡала округтары араһында иң яҡшыһы тип табылды.

Республиканың баш ҡалаһында халыҡтың йәшәйеш именлеге мәсьәләләренә ҙур иғтибар бүленә. Йыл һайын балаларҙың хәүефһеҙлеге, граждандарҙы яҡлау һәм оборона айлығы сиктәрендә хеҙмәттәр араһында үҙ-ара эш итеүҙең һөҙөмтәлелеген арттырыуға йүнәлтелгән күнекмәләр һәм уҡыуҙар уҙғарыла, ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуғанда үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләренә өйрәтеүсе саралар ойоштороола. Өфөлә ғәҙәттән тыш хәлдәргә тиҙ арала яуап бирергә һәм ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уларҙың эҙемтәләрен бөтөрөргә мөмкинлек биргән система булдырылған. Бының өсөн тейешле саралар бар, муниципалитет, төрлө ведомстволар, предприятиелар һәм ойошмалар араһында үҙ-ара һөҙөмтәле эшләү яйға һалынған. Шулай уҡ Өфө Рәсәй ҡалаларының "Балаларҙың барыһы ла мөһим!" конкурсында призер булды һәм онлайн-тауыш биреүҙә еңеүсе дипломы менән бүләкләнде.

# ҮҘЕБЕҘҘӘ ЕТЕШТЕРЕЛГӘН!



**Башҡортостандың баш ҡалаһында тәүге һәм әлегә республикала берҙән-бер "Экомаркет" - экологик яҡтан таҙа, фермер продукттары супермаркеты асылды.**

Башҡорт дәүләт аграр университеты янында урынлашҡан экомаркетта республиканың төрлө фермер хужалыҡтарынан килтерелгән аҙыҡ-түлек һатыла. Улар милли ризыҡтар, һөт продукцияһы, йәшелсәләр, ярымфабрикаттар, яңы бешкән ашамлыҡтар, ҡымыҙ, бал, сәй, ит ризыҡтары һәм вегетариандар аҙығы. Күбеһенә "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" билдәһе бирелгән. Бында ҡомалаҡтан әсеткә яһап икмәк бешерәләр.

Республика Хөкүмәтендә яңы форматтағы магазин асылыуын хупланылар. Уны асыу тантанаһында Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты рәйесе Рөстәм Камалетдинов, Башҡортостандың ауыл хужалығы министры урынбаҫары Юрий Лысов, Өфө ҡала округы хакимиәтенең ҡулланыусылар баҙ-

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓2016 йыл Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда Кино йылы билдәһе менән үтәсәк. Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы республикала Рәсәй киноһы йылы эмблемаһының иң яҡшы проектын эшләүгә конкурс иғлан итте. Бәйгелә республика граждандары һәм ойошмалары ҡатнаша ала. Һәр ҡатнашыусынан бер генә эш ҡабул ителә. Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризалар һәм эштәр 2016 йылдың 15 ғинуарына тиклем ҡабул ителә. Адресы: Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 18, 20-се бүлмә. Белешмә өсөн телефон: (347) 280-87-70. Электрон почта: gafarova.r@bashkortostan.ru.

✓Башҡортостандың Миәкә районында Аҡмулла көндәре уҙҙы. Ошо ваҡиға сиктәрендә бөйөк шағир һәм мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмуллаға арналған саралар ойошторолдо. Байрамға абруйлы ҡунаҡтар, шул иҫәптән уҙған йылдарҙағы лауреаттар ҙа килгәйне. Сығышы менән Миәкә районынан булған медицина фәндәре кандидаты, Өфө ҡалаһындағы "Ихлас" мәсетенең имам-хатибы Мөхәммәт Ғәлләмов Аҡмулла исемендәге премия лауреаты тип танылды. Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премия 27-се тапҡыр тапшырылды.

✓26 декабрҙә Баш ҡаланың Спорт һарайы алдында ит йәрминкәһе ойошторола. Был көн ысын байрамға әйләнәсәк, концерт программаһы, Ҡыш бабай менән осрашыу, балалар өсөн уйындар, ололар өсөн ит сабыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре планлаштырылған. Йәрминкә сараһы менән бәйле был көндә СССР-ҙың 50 йыллығы исемендәге урамдың Зорге урамынан Октябрь проспектына тиклемге участкаһы автотранспорт өсөн ябыҡ буласаҡ.

✓"Рәсәй журналистары. XX-XXI" тип аталған энциклопедия донъя күрҙе. Китапты Рәсәйҙең Матбуғат һәм киң коммуникациялар буйынса федераль агентлығы ярҙамында "Журналист" нәшриәт йорто баҫтырып сығарған. Баҫмала XX быуат башынан алып бөгөнгө көнгә тиклем 10 меңдән ашыу билдәле журналистың биографик мәғлүмәттәре тупланған.

✓Рәсәй банкы Ҡырымға һәм Севастополгә арналған йөҙ һумлыҡ иҫтәлекле аҡса сығарҙы. Тиражы 20 миллион дана тәшкил итә. Уның бер яғында - Ҡарлуғас ояһы, икенсеһендә Севастополь бухтаһында батҡан кораблдәрҙә һәйкәл - рәссам И. К. Айвазовскийҙың "Севастополь рейдында рус эскадраһы" картинаһынан фрагмент төшөрөлгән.

ары идаралығы начальнигы Ольга Завьялова, Башҡортостан сауҙа ассоциацияһы вәкилдәре, ҡала рестораторҙары ҡатнашты. Юрий Лысов фекеренсә, экомаркет республикала берәү генә булырға тейеш түгел - яңы форматтағы магазиндар селтәрен киңәйтеү планлаштырыла.

# ЗАМАН ТАЛАБЫ ИКЕНСЕ...



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Дәүләт советының дөйөм белем биреү системаһын камиллаштырыу мәсьәләләренә арналған ултырышында ҡатнашты.**

Ултырышты асып, Рәсәй Президенты Владимир Путин һуңғы йылдарҙа мәғариф өлкәһендәге ыңғай үҙгәрештәрҙе билдәләне. Рәсәй Президенты, сифатлы белем биреүҙең нигеҙен уҡытыусының эше тәшкил итә, шуға күрә педагогик хеҙмәткәрҙәрҙең профессиональ үсеш системаһын булдырырға кәрәк, тип билдәләне. Заманса әҙерлек программалары индереү һәм педагогтарҙың квалификацияһын күтәреү, уҡытыусы хеҙмәтен матди һәм әхлаҡи яҡтан дәртләндереүҙең һөҙөмтәле механизмын әҙерләү, өҙлөкһеҙ профессиональ үсештә дәртләндереү, уҡытыусының квалификацияһын һәм эш һөҙөмтәләрен баһалау системаһын камиллаштырыу - эшмәкәрлектең төп йүнәлештәре, тине ул. Шулай уҡ уҡыу өсөн уңайлы шарттар булдырыу, шул иҫәптән һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн дә һөнәри йүнәлеш биреү эшен һәм өҫтәмә белем алыу системаһын үҫтереү мәсьәләләренә лә туҡталып үтте.

Дәүләт советы ултырышы йомғаҡтары буйынса журналистар менән аралашҡанда Рөстәм Хәмитов Башҡортостанда уҡытыу системаһының "яҡшы һәм ышаныслы" эшләүен, артабан да заманса уҡытыу алымдарын һәм технологияларын, шулай уҡ электрон белем биреүҙе әүҙемерәк индерергә кәрәк, тип билдәләне.

- Бөгөн белем биреү процессы бөтөнләй башҡа, 10-12 йыл элекке менән сағыштырғанда балалар ҙа икенсе. Уҡытыусылар иһә үҙгәрмәгән, шул уҡ алымдарҙы файҙаланалар. Шуға ла заман талабы һәм мәктәптәрҙең мөмкинлектәре араһында айырма барлыҡҡа килде. Биш йыл элек уҡ мин электрон уҡытыу индереүҙе талап иткәйнем. Бөгөн республика ошо йәһәттән яҡшы һөҙөмтәләргә ирешә, - тине Башҡортостан Башлығы. - Институттар, университеттар, шул иҫәптән Мәғарифты үҫтереү институты белгестәрҙе ҡайтанан әҙерләү менән шөғөлләнергә тейеш. Әлбиттә, бөгөн электрон уҡытыу ғына етмәй. Балаларҙа буласаҡ һөнәр, яңы технологияларҙы үҙләштереү буйынса махсус ҡараш тәрбиәләү мөһим...

# ҠАҘНА КҮЛӘМЕ КҮҘАЛЛАНДЫ



**Өфө ҡала округы Советының сираттағы сессияһында депутаттар 2016 йылға, пландағы 2017 - 2018 йылдарға бюджетты раҫланы.**

Яңы йылдан килемдең - 19,809, сығымдың 20,609 миллиард һум булыуы көтөлә. Бюджет дефициты 800 миллион һум тип күҙаллана. Бюджетты тулыландырыуҙа физик шәхестәрҙең килеменә һалым билдәле урын алып торорға тейеш - 4 миллиард һум. Дөйөм килемгә һалым ҡала ҡаҙнаһын - 1,16, милеккә һалым 1,17 миллиард һумға байытасаҡ. Ҡаланың матди булған һәм матди булмаған активтарын (нигеҙҙә, күсемһеҙ милек) һатыуҙан килгән килем бер миллиард һум самаһы күләмендә булыр тип фаразлана. Дәүләт һәм муниципаль милектә булған объекттарҙы файҙаланыуҙан алынған килем 2,52 миллиард һум тәшкил итергә тейеш. Бынан тыш, юғары кимәлдәге бюджеттарҙан 9 миллиард һумдан ашыу сумма инеүе ҡаралған.

Һәр йылдағыса, 2016 йылдың бюджеты ла социаль йүнәлешле буласаҡ. Уның күп өлөшө мәғарифҡа (9,95 миллиард), торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа (3,63 миллиард), милли иҡтисадҡа (2,39 миллиард), дөйөм дәүләт мәсьәләләренә (1,4 миллиард), дәүләт именлегенә һәм хоҡуҡ һаҡлау эшмәкәрлегенә (792 миллион), мәҙәниәткә һәм кинематографияға (427 миллион), социаль сәйәсәткә (497 миллион), физик культура һәм спортҡа (609 миллион) бүленәсәк.

Алдағы йылда уртаса эш хаҡының 33,4 мең һум булыуы күҙаллана. 2015 йылда был һан 31 748 һум ине. 2018 йылға нигеҙ сценарийы буйынса уртаса эш хаҡы 36528 һум тип күҙалланһа, оптимистик фараз буйынса ул 37834 һум. Шулай уҡ эшһеҙҙәрҙең һаны ла кәмеүе көтөлә. Алдағы йылда 835 мең квадрат метр торлаҡ төҙөү күҙаллана. 2014 йылда 78 балалар майҙансығы төҙөлһә, 2015 йылда был һан 65 булған, 2016 йылда иһә 95-100-гә еткерелеүе ихтимал.

Былтыр Өфө ҡала Советы беренсе тапҡыр журналистар араһында ҡала советының һәм хакимиәтенең эшмәкәрлеген яҡтыртҡан журналистар араһында конкурс үткәрә башлағайны. Сираттағы сессияла депутаттар еңеүселәрҙе бүләкләү тураһында ҡарар ҡабул итте. "Баҫма һүҙ" номинацияһында беренсе һәм икенсе урынды "Вечерняя Уфа" гәзите вәкилдәре - Ирина Нуриманшина менән Марина Деева алһа, өсөнсө урынға "Киске Өфө" гәзитенән Зөйтүнә Ниғмәтйәнова лайыҡ булды. "Интернет донъяһы" номинацияһында "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы коллективы еңеү яуланы.

"Объективтағы ҡала" номинацияһында беренселек "Вся Уфа" телеканалы хәбәрсеһе Светлана Нәзирова, икенсе урында - "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы, өсөнсө урында "Вся Уфа" телеканалынан Ләйсән Әкимбәтова.

# ӨФӨБӨҘГӘ КҮПТӘР ЫЛЫҒА...



**Башҡортостандың баш ҡалаһына Александр Горшков етәкселегендә Рәсәйҙең Конькиҙа фигуралы шыуыу федерацияһы делегацияһы килеп китте. Улар Өфөнө ISU Challenger Series турнирының бер этабын үткәреү урыны тип ҡарай һәм ярыш шарттары талаптарына тап килеү-килмәүҙе тикшерә.**

ISU Challenger Series турниры сериялары 2014 йылда Конькиҙа уҙышыусыларҙың халыҡ-ара союзы тарафынан ойошторола һәм ISU турнирҙары статусын алып, бер серияға тупланған традицион халыҡ-ара турнирҙарҙы үҙ эсенә ала. Былдай үҙгәреш Гран-при серияһы ҡатнашыусылары исемлегенә инмәгән спортсыларға ISU сиктәрендә юғарыраҡ позицияларҙа алырға мөмкинлек бирә.

Ҡунаҡтар Зорге урамындағы Спорт һарайы - Ҙур һәм бәләкәй боҙ аренаһары, техник биналар һәм сисенеү бүлмәләре менән танышты. "Өфө халыҡ-ара планда билдәле ҡалаға әүерелде. Бында инфраструктура ныҡ үҫешкән, һәм беҙ, әлбиттә, тотош ил буйынса фигуралы шыуыуҙы бер тигеҙ үҫтерергә тырышабыҙ. Өфөлә фигуралы шыуыуҙы яраталарҙыр, тип ышанабыҙ. Шуға ла беҙ бында баш ҡала халҡы спорттың был төрөн үҙ күҙҙәре менән күрһен өсөн иң көслө спортсыларҙы килтерәсәкбеҙ", - тине Федерация президенты А. Горшков.

*ҮӘТ, ЯҢЫЛЫҠ!*




# ҒӘМӘЛДӘРЕБЕҘ...

## хоҡуҡи яҡтан да көйләнһен

**Рәсәй Федерацияһында башҡорттарҙың Федераль милли-мәҙәни автономияһы төҙөлдө. Был хаҡтағы ҡарар Мәскәүҙә республиканың Хөкүмәт, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайы, илдең башҡорт йәмәғәт һәм милли ойошмалары, фән, мәҙәниәт һәм сәйәсәт өлкәһе вәкилдәре ҡатнашлығында үткән ойоштороу конференцияһында ҡабул ителде.**

Федераль милли-мәҙәни автономия - билдәле бер этносҡа ҡараған һәм үҙҙәренең тарихи Ватанынан ситтә әҙселектә йәшәгән Рәсәй граждандарының берләшмәһе. Уның маҡсаты - милли мәҙәниәттең үҙенсәлеген һаҡлау, туған телде, мәғарифты һәм башҡа өлкәләрҙе үҫтереү.

Рәсәй Федерацияһы биләмәһендә 1584,5 мең башҡорт йәшәй. Башҡортостандан ситтә көн күргән 25 проценттан ашыу милләттәшебеҙҙең күбеһе ябай булмаған этномәҙәни шарттарҙа йәшәргә мәжбүр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Рәсәй төбәктәрендә, яҡындағы һәм алыҫтағы сит илдә йәшәүсе башҡорттар үҙҙәрен берҙәм башҡорт этносының бер өлөшө итеп тойоп, милли үҙаңын һаҡлай килә. Яңы төҙөлгән автономия илдең йәмғиәт тормошонда, халыҡ-ара татыулыҡты нығытыу, башҡорт халҡының туған телен, мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү өлкәһендә әүҙем эшмәкәрлек алып барыусы, илдең бөтөн башҡорт йәмәғәт ойошмаларын берргә туплаусы көс булырға тейеш. Ул шулай уҡ милләттең этномәҙәни үҫешенә ҡағылышлы проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгрессы)" менән берлектә эшләүҙе, Рәсәй Федерацияһының 2025 йылға тиклемге осорға иҫәпләнгән Дәүләт милли сәйәсәте стратегияһын тормошҡа ашырыуға әүҙем ярҙамлашыуҙы, илдең башҡа төбәктәрендә милли-мәҙәни автономиялар булдырыу буйынса эшмәкәрлектә лә бурыс итеп ҡуйырға тейеш, тип билдәләнде автономияның ойоштороу съезында.

- Бөгөнгә көндә теге йәки был мәсьәләгә ҡарата изге ниәттә булыу ғына аҙ. Йәғни, туған телде һәм мәҙәниәтте һаҡлау тураһында һүҙ һөйләү генә етмәй, аныҡ ғәмәлдәр ҡылыу кәрәк. Ундай эшмәкәрлектең дөрөҫ, береһе тарафынан да инҡар итә алмаҫлыҡ һәм хоҡуҡи яҡтан көйләнгән алгоритмын күреү мөһим. Беҙ ошондай әһәмиәтте бурыстарҙы хәл итеү өсөн файҙаланасаҡбыҙ ҙа инде яңы структураны, - тине Совет Федерацияһының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова. Әйткәндәй, Лилиә Салауат ҡыҙы башҡорттарҙың Федераль милли-мәҙәни автономияһы советы рәйесе итеп һайланды.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һипкелдәр

❖ Күптәр һипкелдәрҙән, пигмент таптарынан, йыйырсыҡтарҙан яфалана. Тирене еләк, петрушка, ҡыяр, һуған, лимон һуты таҙарта. Был емешйәшелсәләрҙең һутына 1 процентлы һеркә, ярты йомортҡа ағы ҡушып, битлек яһарға ла мөмкин.

❖ Һәр иртә ҡайын һуты менән йыуыныу файҙалы. Кисен битте лимон һуты өҫтәлгән һыу менән йыуығыҙ.

❖ Грейпфрут һутына манып алынған мамыҡ киҫәге менән иртәле-кисле пигмент таптарын ышҡырға була.

❖ 1-әр өлөш һыу, лимон һуты һәм һеркә ҡушып яһалған төнәтмә менән йыуынырға була. Әгәр тире ҡоро икән, бер аҙ глицерин өҫтәгеҙ.

❖ Тоҙло ҡыяр һыуы тирене агартыу сифатына эйә. Ул майлы тирегә килешә.

❖ Һыҡтылы тирене башта 2 процентлы салицил спирты менән һөртөп, битте 10-15 минут быуға тотоғоҙ. Һунынан тағы салицил спирты һөртөгөҙ.

❖ Һыҡтылар, пигмент таптары, миндәр, йыйырсыҡтар, һипкелдәр бөтһөн өсөн 1 балғалаҡ андыҙ тамырына 200 мл һалҡын һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә, ҡайнау хәленә еткерергә һәм талғын утта ярты сәғәт ҡайнатырға. Һөҙөргә һәм ошо төнәтмәне биткә һөртөргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр ҡабатларға.

❖ Ҡауындың йомшаҡ өлөшөнән битлек яһағыҙ.

❖ Аҡ лилиә сәскәһе төнәтмәһе лә файҙалы. Уға шул уҡ күләмдә гәрсис порошогы өҫтәргә.

### Һимереү

❖ Күгүләнде (спорыш) ҡалаҡтың 2/3 өлөшө күләмендә алып, 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуытырға һәм ашар алдынан эсергә. Көн дауамында ошо төнәтмәне эсеп бөтәһегеҙ һәм иртәгеһенә яңынан яһайһығыҙ.

### Аднексит

❖ 1 ҡалаҡ һары мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 15 минут талғын утта ҡайнатырға, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 1/4 стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 1 аҙна, көн һайын яңы төнәтмә яһарға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҒАИЛӘЛӘРҘЕ...

## Һомай ҡурсалай

**Алла-әсә булараҡ, Һомай ғаиләләр барлыҡҡа килеү, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе һаҡлауға булышлыҡ итә, ҡатын-ҡыҙҙы ҡурсалай.**

"Зәйнулла һәм Матурлыҡ" әкиәтендә герой ҡыҙ Зәйнуллаға ғашиҡ була һәм уны һағыныуынан ауырып китә. Уны бары тик Һомай ҡоштоң йомортҡалары менән генә дауалап була. Был турала белгәс, Зәйнулла ҡоштоң ояһын табып, унан өс йомортҡа алып, ҡыҙға килтерә. Ҡыҙ уларҙы һытып эсә, һауығып та китә һәм ятаҡан егетенә кейәүгә сыға. Тиҙҙән Зәйнулла батша, ә сибәр ҡатыны батшабикә булып китә.

Башҡорттарҙың бала табыуға бәйле йолаларында Һомай ауырлы ҡатындарҙы ҡурсалаусы булып тора: бала ауыр килгәндә кендек инәһе Һомайға мөрәжәғәт итеп, баланан имен-аман ҡотолоуҙы һорай.

Алда әйтелгәнсә, "Урал батыр" эпосында аҡҡош-Һомай магик көскә эйә. Ул үҙенең ҡаурыйы менән яраларҙы дауалай, үҙенә ярҙамға аҡҡоштарҙы ла ҡауырыйы ярҙамында саҡыра. Уның атаһы Самрау ҙа дауалау һәләтенә эйә: "Ҡамыр батыр менән убырлы ҡарсыҡ", "Аҡъял батыр" әкиәттәрендә ул батырҙарҙың яраһын бер ҡанат елпеүе менән генә дауалай.

Башҡорт халыҡ ижадында Һомай кешеләргә бәрәкәт килтереүсе булараҡ та сағыш яһай. "Һомай ҡош" әкиәтендә ҡарт Һомай ҡошто тота. Ҡош тиҙҙән йомортҡа һалып, уларҙы баҫып сығара. Ҡарт һирәк осраған ҡоштарҙы һатып, байып китә. Ышаныуҙар буйынса, Һомай бәхет ҡошо иҫәпләнә.

Һомай/Умай/Гюма/Май (һәм башҡа варианттары) - ҡояш аллаһы-әсәнең, түллек, муллыҡ алиһәһенең, бала табыусыларҙы һәм балаларҙы һаҡлаусының, ҡайһы бер геройҙарҙың һаҡсыһының, бәхет, байлыҡ таратыусының культы урал-алтай, ҡытай-тибет, һинд-европа халыҡтарына, боронғо шумерҙарға, этрускарға һәм башҡаларға билдәле булған. Күп халыҡтарҙың традицияларында Һомай алиһә-әсә, балаларҙы һәм әсәләрҙе һаҡлай. Боронғо төрөк мифологияһында Умай иң юғары алланың - Тәңренең (Һауаның) ҡатыны. Алтай төркиҙәрендә ул юғары алла - Жайыҡтың ҡатыны тип, X быуатҡа ҡараған боронғо уйғыр текстарында изгелек килтереүсе батшабикә тип һүрәтләнә. Хакастарҙың ышаныуҙары буйынса, Ымай-идже - балаларҙың йәнен һаҡлаусы, яңы тыуған балаға йән алып килә. Нанайҙарҙың ышаныуы буйынса, Майда-ыне/Умай үлгәндәрҙең йәнен терелтә, ул шулай уҡ балаларҙың йәнен һаҡлаусы. Шор, хакас халыҡтары "Умай"/"Оми" һүҙендә аҡҡош сүрәтендәге бала йәнен аңлаған. Ул ҡатын-ҡыҙға инеп, уны ғомалы итә һәм баланың тормошона башланғыс һала.

Бәлки, шуғалыр ҙа балҡар, ҡарасәй халыҡтарында Умай-эне үлем аллаһы булып тора. Урта Азия һәм Иран халыҡтарында Хума/Хумай үлеләр донъяһы менән бәйле. Был этностарҙың мифтарында ул ҡош-некрофаг. Ҡырғыҙ фольклорында Хубай-кус тигән образ бар. Һомай йән биреүсе булараҡ, уның образы шул рәүешле икенсе төрлө формаларға әйләнеп китеүе лә ихтимал. Мәҫәлән, шор, хакас ышаныуҙарында яҡты Умай йән бирә, ҡараңғы Умай балаларҙың йәнен урлай. Алтай һәм шар халҡында Умай үлгән кешенең йәнен алып китә. Бындай ҡараштар башҡорт халҡында ла осраған.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

**Һуғым һуйыу - борондан килгән һәм бөгөнгө көндә лә еренә еткерелеп үтәлә торған бик матур йола ул. Көткән малдарының имен-аман ҡураға инеп ятыуы менән ауылдарҙа өй һайын һуғым һуя башлайҙар. Уға һуғым ашына саҡырышыу йолаһы эйәрә, ит мул саҡта табындар ҡороп, үҙ-ара һөйләшеп ултырыу ҙа күркәм ғәҙәт. Учалы районы Баттал ауылында йәшәгән Гәүһәр БИРҒӘЛИНА был йолаларҙы тағы бер барлап алырға саҡыра.**

# УЛҒА - БОТ...

## ҡыҙға - ҡанат



**➔ Һуғым һуйыу йолаһы нисек башҡарыла? Уның ниндәй рәттәртибе бар?**

- Һуғым осоро ауыл кешеһе өсөн көтөп алынған мәлдәрҙең береһе ул. Үҙенә күрә байрамға әүерелеп китә бит ул. Йәштәр өлкәндәрҙән йола тәртибенә өйрәнә, мал һуйғанда ир-егеттең таҫыллығы һынала, малдың эс-ҡарынын таҙартҡанда киленд әрҙең уңғанлығы күренә. Унан һуң, һуғымды бешереп, һөйләшеп ултырыу үҙе бер ғүмер.

Һуғым һуйыла торған көндә алдан һөйләшеп ҡуябыҙ. Малды халыҡ араһында "ҡулы тәмле" тигән даны сыҡҡан берәйһенән салдырырға тырышаһың. Быйыл бына беҙҙең һуғымыбыҙ бик тәмле. Уға башҡа ир-ат ярҙамлаша. Боронғолар, бабаға ултыртылған кеше салырға тейеш малды, ти торғайнылар. Бының да берәй ғилләһе барҙыр инде. Ит башҡорттарҙың төп туҡланыу ризығы булғанғамы, һуғым һуйыуҙың рәте-сиратын барыһы ла белә, тип уйлайым. Элек яҙлы-көҙлө итте күп ашамай торғайнылар, хәҙер малды күпләп тоталар. Шуға ит тә кешелә йыл әйләнәһенә бар. Заманса һыуытҡыстарға тултыраһың да, мәшәҡәте лә бөтә. Югиһә, бер ваҡыт банкаларға тултырып, итте быҡтырып ала инек йәйгелеккә. Һуйылған итте тәрбиәләп, эсәген йыуып алғас, шул уҡ көндө был өмәлә ҡатнашыусыларҙы, ағай-энене һуғым ашы ашарға саҡыраһың. Хәйбулла яҡтарында һуғым һуйыусыларға малдың йөрәге, бауыр, үпкәһен турап, күп итеп һуған ҡушып, майҙа ҡыҙҙырып ашаталар. Йоланы һанламаған кешеләр табын йыйып ултырыуҙан ҡасып, мал салыусыға муйын һөйәген бирә лә ҡайтара.

**➔ Һуғым ашына табын нисек әҙерләнә?**

- Беҙҙең яҡта һуғым ашына бишбармаҡ әҙерләмәйҙәр. Мәҫәлән, күрше әбейҙәлдәр ҙурыраҡ ҡунаҡ йыйылған һәр табынға ҡуя был затлы ризыҡты. Беҙҙең ауылда итте бешереп, уны картуф менән айырым ҡуялар. Итте мул итеп бешерәбеҙ. Борон ҡунаҡ табынына ҙур батмусҡа өйөп һалынған ит ҡуйыу йомартлыҡ, етеш йәшәү билдәһе булған. Йола буйынса, һуйған, эсәк таҙартышҡандарға итлерәк ерҙәрен бирәһең. Ҡул көсө, ҡул бәрәкәте китмәһен өсөн эшләнә был. Һурпаға һалма һалып, ҡунаҡтарға аш итеп бирәбеҙ.

Магазинда тәм-том күп хәҙер. Шулай ҙа үҙең бешергәнгә етмәй. Сәйгә сәк-сәк ҡуябыҙ. Бешереүе еңел булмаһа ла, ул батша табынын да биҙәрлек иң дан ризыҡ. Ҡоймаҡты ла мотлаҡ ҡуябыҙ. Һәр кесе йома таба еҫе сыҡһын, ти торғайнылар элек. Байрам табынына ла таба еҫе сығарып алаһың шулай. Боронғо йолалар яйлап көнкүрештән сыға бара шул.

**➔ Итте өлөшкә бүлеү һуғым ашы йолаһында гел башҡарылған булырға тейеш. Был хаҡта мәғлүмәт хәтерегеҙҙә һаҡланмағанмы?**

- Иттең иң тәмле өлөшө йорт хужаһына һәм өлкән ир-егеттәргә бирелгәнен беләм. Ғаилә эсендә иһә итте атай бүлгән. Эре мал, һарыҡты нисек бүлгәндәрҙер, белмәйем, бына ҡош итен шулай бүлә инеләр: муйын - ул әсәйҙеке, әсәй кеше муйын кимереп тә туя. Баш ите - атайҙыҡы. Бот - ир баланыҡы, сөнки улар ғаиләнең төп ярҙамсыһы. Ҡанат - ҡыҙҙыҡы, улар ҡасан да булһа атай йортонан осоп сығып китә. Ҡоштоң ҡойроғон да хужабикәгә бирәләр. Йәғни, ит бүлеп, тағы берҙе ғаиләгә бурыстарыңды иҫкә төшөрөп алалар инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ил йолаһына хан да буйһона, тигән халыҡ. Йола - милләтте һаҡлаусы ғәмәл, шуға ла бөгөн дә уларҙы белеп, ҡулланып йәшәһәк, үҙ асылыбыҙҙан ситкә тайпылмаҫбыҙ. Бөгөнгө һөйләшеүгә уҡыусыларыбыҙҙы ла саҡырабыҙ, һуғым һуйыу, итте өлөшкә бүлеү, һуғым ашына саҡырышыу йолалары һеҙҙең яҡта нисегерәк үтәлә?**

**Дилбәр ХӘКИМОВА әңгәмәләште.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАЛАЛАРҒА ВАҠЫТ ЙӘЛЛӘМӘЙЕК!

Улдарым көн дә йоҡоға талыр алдынан "Әсәй, бәләкәй сағыбыҙҙағы ҡыҙыҡтарҙы һөйлә әле", тип, бәләкәй саҡта үҙҙәре менән булған төрлө мәҙәктәрҙе һөйләтә. Ниндәй генә мажараларҙы иҫкә төшөрмәйбеҙ! Ҡай бер урында, улай түгел, тип бәхәсләшә лә башлайҙар. Уйлап сығарып ултырмайым инде, тиһәм, иҫтәре китеп аптыраған булалар. Беләһегеҙме, ошолай итеп ихлас һөйләшеп, көлөшөп ултырған мәлдәрҙе ныҡ яратам. Бер ниндәй байлыҡҡа ла алыштырмаҫлыҡ татлы мәлдәр бит ул. Ошо ваҡытта күңел берлеген тойоу көс-ҡеүәт, дәрт бирә, дарманды арттыра. Ә тағы ла улдарымдың күңелен аңларға ярҙам итә. Юҡ-юҡта терпе һымаҡ булып киткән 15 йәшлек улым да ошолай икәү-ара һөйләшеп ултырғанда асылып, яҙылып китә. Үҙемде борсоған һорауҙарға ла яуап алам, ҡайһы берҙә хәс бәләкәй балалай күреп тупылдатып һөйөп ҡуям. Шул арала кәрәк тапҡан өгөт-нәсихәттәремде биреп ҡалырға ашығам:

"Тырыш, улым. Һәр көнөңдөң ҡәҙерен белергә, минутын да әрәм итмәй йәшәргә тырыш. Яныңа матур күңелле кешеләрҙе генә йыйырға, башҡарған ғәмәлдәреңдән, һөйләгән һүҙҙәреңдән оялмай ғүмер кисерергә тырыш! Күккә күтәргән, ҡанат ҡуйған, бер тулҡында тирбәлгәндәр менән йышыраҡ аралашырға, ауыр йөк ишелеп төпкә һөйрәгәндәрҙән йырағыраҡ торорға тырыш! Һин бәхетле булыр өсөн тыуғанһың, улым! Шуның өсөн дә матур йәшәргә тырыш..."

Бына шулай! Бала күңелен тойорға өйрәнеү, кәрәк саҡта үҙенә лә һиҙҙермәй генә дөрөҫ юл күрһәтеп ебәреү өсөн күпме аҡыл, рух көсө, әсәйҙәргә генә хас һиҙемләү тойғоһо, хатта ҡайһы берҙә һөйләшә белеү оҫталығы ла талап ителә. Һәр нәмәлә сама кәрәк шул. Үтә ныҡ әпәүләп, баланың иркен дә сикләргә ярамай. Был бигерәк тә үсмерҙәргә ҡағыла. Ни генә тиһәгеҙ ҙә, уларҙың да хаталанырға хаҡы бар. Әҙерҙе ҡабул итеүе енел, әммә уның ҡәҙере юҡ. Тәмле аш, модалы кейем, иҫ китерлек уйынсыҡтар - барыһы ла бала өсөн, тибеҙ. Ә балаға, бәлки, уларҙың береһе лә кәрәкмәйҙер. Бәлки, уға бары күңел йылыһы етәлер. Шуға күрә балалар менән аралашып алырға биш минут ҡына ваҡытыбыҙҙы йәлләмәйексе, әсәйҙәр!

**Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА.**

*РӘХМӘТЛЕБЕҘ*

# ҠИММӘТЛЕ ХАЗИНАНЫ БЕҘГӘ...

## бөйөк рус улы Сергей Руденко ҡалдырған

**Гәзитебеҙҙә 2012 йылдың 48-се һанынан башлап 2015 йылдың 42-се һанына тиклем күренекле рус этнографы, антропологы, археологы һәм географы Сергей Иванович Руденконың бынан 65 йыл элек тәүге тапҡыр нәшер ителгән "Башҡорттар" китабын башҡортсаға тәржемә итеп баҫтырҙыҡ.**




С. И. Руденко 1885 йылдың 28 ғинуарында Харьков ҡалаһында дворяндар ғаиләһендә тыуа. 1895 йылда Руденколар ғаиләһе Уралға күсә һәм Сергей уҡыуын Пермь гимназияһында дауам итә. Унның атаһы Башҡорт ерҙәрен межалау комиссияһында эшләй, шуға күрә йәйге каникулдар ваҡытында Сергей атаһы менән бергә башҡорттар араһында йөрөй. Шулай итеп, С.И. Руденко бала сағында уҡ башҡорт халҡының көнкүреше һәм мәҙәниәте менән яҡындан таныша.

Гимназияны уңышлы тамамлағас, Сергей 1904 йылда Санкт-Петербургтағы Император университетының физика һәм математика факультеты тәбиғи фәндәр бүлегенә уҡырға инә. Студент сағында, 1905 - 1907 йылдарҙа, ул экспедициялар барышында Өфө, Ырымбур, Пермь губерналарының төрлө улыстарында башҡорттар тураһында этнографик, антропологик һәм фольклор материалдары йыя. Шул сәйәхәттәр ваҡытында тупланған фольклор мәғлүмәттәре нигеҙендә Руденко 1908 - 1909 йылдарҙа *"Revue de traditions populairs"* француз журналында башҡорттарҙың этнографияһы һәм фольклоры тураһында *"Traditious et contes Bashkirs"* ("Башҡорттарҙың риүәйәттәре һәм әкиәттәре") тигән мәҡәләһен баҫтыра.

Шуны әйтергә кәрәк: студент йылдарында С.И. Руденко күренекле рус антропологы Ф. К. Волков менән таныша, унның лекцияларын ҡыҙыҡһынып тыңлай, антропология фәне менән мауығып китә. 1910 йылда уҡыуҙы уңышлы тамамлағас, уны университеттың география һәм антропология кафедраһына эшкә алып ҡалалар.

1912-1913 йылдарҙың йәйендә С. И. Руденко тағы ла Өфө, Ырымбур, Пермь губерналарында ғилми тикшеренеүҙәр үткәрә, башҡорттар һәм башҡа халыҡтар тураһында Рус музейының этнография бүлегенә күп кенә экспонаттар йыя, 1905 - 1907 һәм 1912 йылдарҙа 1079 дананан торған башҡорт коллекцияһын туплай. 1907, 1912-1913 йылдарҙа Урта һәм Көньяҡ Уралдағы экспедициялар ваҡытында ғалим башҡорттарҙы антропологик яҡтан да өйрәнә. Бөтәһе 1847 кешегә антропометрик үлсәүҙәр үткәрелһә, шуларҙың 1512-һен Руденко үҙе тикшерә. 1916 йылда С.И Руденконың "Башкиры. Опыт этнологической монографии. Ч. I. Физический тип башкир" тигән хеҙмәте Рус география йәмғиәте тарафынан "Записки РГО по отделению этнографии" серияһында нәшер ителә. Китап авторҙың антропологик тикшеренеүҙәре нигеҙендә яҙылған, һәм шул күҙәтеүҙәр һөҙөмтәһендә ул башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙе антропологик яҡтан өс өлкәгә бүлә: 1) көнсығыш; 2) көньяҡ-көнсығыш һәм үҙәк; 3) төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш өлкәләр. Аталған монографияны С. И. Руденко 1917 йылдың декабрендә Мәскәү дәүләт университетында география магистры дәрәжәһенә диссертацияһы итеп уңышлы яҡлай.

Авторҙың "Башкиры" монографияһының икенсе өлөшө 1915 - 1916 йылдарҙа әҙер була, ләкин революция һәм граждандар һуғышы арҡаһында ваҡытында донъя күрмәй ҡала. С. И. Руденконың "Башкиры. Опыт этнологической монографии. Ч. II. Быт башкир" китабын шулай уҡ Рус география йәмғиәте баҫтырып сығара.

"Башкиры. Опыт этнологической монографии. Ч II. Быт башкир" хеҙмәте 12 бүлектән тора ("Һунар һәм балыҡсылыҡ", "Малсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм ҡортсолоҡ", "Игенселек", "Ашамлыҡ", "Кейем", "Торлаҡ һәм ҡаралтылар", "Ғаилә һәм ырыу", "Ижтимағи тормош" һ.б.), ҡушымта рәүешендә 4 этнографик карта бирелгән. С. И. Руденко башҡорт халҡының көндәлек тормошон бөтә яҡтан тикшерә һәм анализлай.

1928-1930 йылдарҙа Сергей Иванович Руденко СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан буйынса экспедицияһына етәкселек итә. Экспедиция Башҡортостандың етештереү көстәрен һәм халҡын комплекслы тикшерергә тейеш була һәм уға бөтәһе 17 отряд инә. Унның барышында Башҡортостан өсөн файҙалы геологик, геоморфологик, климатты өйрәнеү, гидрологик, геоботаник, экономик, лингвистик, антропологик һәм башҡа күп яҡлы тикшеренеүҙәр башҡарыла.

1952 йылда С. И. Руденконың инициативаһы буйынса СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалының ҙур этнографик экспедицияһы ойоштороła һәм ул үҙе унда ике айҙан ашыу ҡатнаша. 1955 йылда СССР Фәндәр академияһы нәшриәтендә Сергей Ивановичтың 30 табаҡтан ашыу торған "Башкиры. Историко-этнографические очерки" китабы донъя күрә. Был китап "Быт башкир" нигеҙендә эшләнә, автор шул заман материалдарын ҡуллана һәм яңы 4 бүлек өҫтәй, ҡайһы бер бүлектәргә өҫтәмәләр индерә.

С. И. Руденконың "Башкиры. Опыт этнологической монографии. Ч II. Быт башкир" һәм "Башкиры. Историко-этнографические очерки" монографиялары бөгөнгө көнгә тиклем классик әҫәр һанала һәм халыҡтың көнкүрешен фәнни яҡтан тикшереүселәргә әле лә өлгө булып тора.

Сергей Иванович Руденко ауыр, ләкин бәхетле тормош кисерә. 1930 йылда ҡулға алынып, Беломорканалға һөргөнгә ебәрелһә лә, тормоштоң аяуһыҙ ысынбарлығын үҙ иңендә татыһа ла, археология, антропология, этнография өлкәләрендә донъя кимәлендәге асыштар яһап өлгөрә.

Украинала, Харьков ҡалаһында тыуып, Пермдә гимназия тамамлап, Санкт-Петербургта йәшәһә лә, бөйөк рус ғалимы Сергей Иванович Руденко Башҡортостан, башҡорт халҡы этнографияһы, антропологияһы һәм тарихы менән ғүмере буйы ҡыҙыҡһына. Ошо халыҡты, ул йәшәгән ерҙе яратмайынса, донъя этнография классикаһына ингән "Башкиры. Опыт этнологической монографии", "Башкиры. Историко-этнографические очерки" хеҙмәттәрен яҙыу һис тә мөмкин булмаҫ ине. Беҙ был бөйөк кеше алдында түбәнселек менән баш эйәбеҙ.

**Айбулат ПСӘНЧИН, география фәндәре докторы, профессор.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Мөғжизәле Башҡорт тауын ҡалдырып, Ағиҙелгә табан боролдоҡ һәм, ярты юлыбыҙҙы уҙыуға, беҙгә ерләү йолаһын башҡарыусы башҡорттар осраны. Иң алдан балта һәм көрәктәр тотҡан өс башҡорт аттарҙа килә ине; күрәһең, улар ҡәбер ҡаҙырға тейеш булғандыр. Һыбайлы мулла ике йөҙ сажин арттараҡ бара, унның артынан мәрхүмде алып киләләр. Мәйет ҡабыҡ эсенә һалынып, киндер туҡыма менән уратып тегелгән. Ҡабыҡ арҡыры бау менән тоташтырылған ике бау элмәккә аҫып ҡуйылып, улар аша үткәрелгән ҡолғаның остары йәнәш барған ике һыбайлы башҡорттоң эйәрҙәренең алғы ҡашағаларына һалынған: мәрхүм улар араһында бишектәге кеүек бәүелеп бара. Мәрхүмдең артынан уны оҙатыусы туғандары һәм яҡындары барыһы ла һыбай килә. Үҙ ауылынан ситкә күсеп киткән башҡорттарҙа ерләү йолаһы шул рәүешле башҡарыла икән (Бында һүҙ йәйләүгә сыҡҡан башҡорттар тураһында бара. - **Ред. иҫк.**). Кискә табан Ағиҙелгә ҡойған Тәйрүк йылғасығы буйында урынлашҡан Көҫәпҡол исемле башҡорт ауылына килеп еттек һәм шунда ҡуна ҡалдыҡ.

Был төндә ауылдағы башҡорттар тынғылыҡ күрмәне: иртәгәһенә улар ауылдарынан күсеп китергә ниәт итәләр ине. Миңә уларҙың күсенеп йөрөүе хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәк булыр.

Башҡорттарҙы ҡырағай һәм ҡала мәҙәниәтен үҙ итеүсе халыҡтар аралығында йәшәүселәр, тип иҫәпләргә була. Ҡыштың үтә һалҡын, ҡарҙың тәрән булыуы һәм көслө бурандар башҡорттарҙы, башҡа татар (төрки - **Ред. иҫк.**) халыҡтары ғәҙәтенсә, ҡыш айҙарын ауылдарҙа, насар биналы ағас йорттарҙа үткәрергә мәжбүр итә, йәш мал-тыуарҙы һәм еген аттарын да шунда тоталар; башҡа малдары ҡыш буйына ялан ҡыҙырып йөрөй. Уҙған йәйҙә үләндең наҡыҫ булыуы бигерәк тә башҡорттар өсөн күңелһеҙ һөҙөмтә бирҙе: былай ҙа бесән әҙерләүгә вайымһыҙыраҡ ҡараған башҡорттар үҙҙәре ҡулланған ураҡ салғы менән ҡыҫҡа үләнде саба алманы һәм ҡыштың күп өлөшөн малдарын йәш йыла ағасы иҫәбенә аҫырарға мәжбүр булды. Малдарының йыла ҡабығы кимереп кенә тереклек итеүе хужалары өсөн зыянһыҙ ҡалманы: малдарының байтағы ҡыш сыға алманы, урмандары ла аҙ киҫелмәне. Башҡорт ауылдары мал кимергән йыла ағастары яндырылған усаҡтар менән тулды.

Йәй көндәрен башҡорттар үҙҙәренең ауылдарынан байтаҡ йыраҡ ерҙәрҙә - далаларҙа, тауҙарҙа һәм урмандарҙа уҙғара: йыш ҡына йөҙ саҡрымға тиклем күсеп китәләр. Шул саҡта уларҙың күсеп йөрөүгә яраҡлаштырылған тормошо гөрләп тора, сөнки улар йәй көнө башлыса һөт аҙыҡтары, һирәгерәк мал ите менән туҡлана; ә икмәкте улар бөтөнләйгә күрмәй-белмәй йәшәй. Шул саҡта улар барса малдарын үҙҙәре эргәһендә тота һәм улар менән бергә бер урындан икенсеһенә күсеп йөрөй, ә ҡышлауҙарына яҡын яландарҙы көҙгө сабынлыҡ өсөн малдан тапатмай ҡалдыра.

Ҡалмыҡтар кеүек, кейеҙ тирмәләрҙә йәшәйҙәр; ярлыраҡтары туҙ менән ҡапланған ҡыуыштарҙа яуым-төшөмдән һаҡлана. Күсеп йөрөү ваҡыты еткәнсе, ауылда үҙҙәренең барлыҡ йорт ихтыяждарын үтәп ҡалырға тырышалар: ауыл эргәһендә күп булмаған миҡдарҙа ашлыҡ сәсәләр, урмандарҙа үҙҙәренең солоҡтарын ябалар, кейеҙ баҫалар һәм тире иләйҙәр. Солоҡтарҙы ир-ат ҡарарға тейеш, ә башҡа йорт эштәрен ҡатын-ҡыҙ башҡара: уларҙың ҡатындары тегенә, аяҡ кейеме йүнләй, тире иләй һәм кейеҙ баҫа. Уларҙың тире иләү, күн әйберҙәр яһау маһирлығын билдәләмәйенсә булмай.

**(Дауамы бар).**

✓ **Рәсәйгә күберәгән аҫҡы япраҡтарҙан төрөлгән сәй килтерелә, ә өҫкө япраҡлы сәйҙәр бик һирәк осрай. Бик теләгәндә, уларҙы тик махсус магазиндарҙа һәм нығ ҡыйбат хаҡҡа ғына табырға мөмкин.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БАЙ БУЛАЙЫҠ!

**"Бәхет аҡсала түгел, тиһәләр ҙә, нәҡ байлыҡ кешегә үҙен баһалы, әһәмиәтле, абруйлы һәм тормошта ирекле итеп тойорға мөмкинлек бирә", ти йәш эшҡыуар Артур ВАҺАПОВ һәм һәр кемде матди яҡтан етеш тормошта йәшәүгә ынтылырға саҡыра.**

- Урта мәктәпте тамамлауым коррупцияның гөрләп сәскә атҡан ваҡытына тура килде. Белем тураһындағы таныҡлығымда тик яҡшы билдәләр генә булһа ла, юғары уҡыу йортона әләгер өсөн атай-әсәйемдең тинләп йыйған аҡсаһын тотонорға мәжбүр булдыҡ. Ҡайһы бер класташтарым, ошо матди ҡаршылыҡты йырып үтә алмау сәбәпле, теге йәки был һөнәр тураһындағы хыялдары менән хушлашты. Нәҡ шул осорҙа мин тәүге тапҡыр аҡсаның баһаһын, ҡиммәтен һәм тормошта ни тиклем ҙур урын биләүен аңланым. Шуға күрә, уҡыуҙан тыш ваҡытта аҡса табырға, уны күбәйтергә тырыштым. Ул саҡта минең матди яҡтан тиҙерәк аяҡҡа баҫырға тырышыуым күпселек таныштарым-дуҫтарым араһында аҫтыртын көләү, аңлашылмаусанлыҡ, битарафлыҡ тыуҙырҙы. Ә һуңынан улар, дипломлы белгестәр, мин студент саҡта уҡ баштан үткәргән тәжрибә туплау, конкурентлыҡты йырып сығыу кеүек тормош баҫҡыстарын уҙған саҡта, мин аяғымда ныҡлы баҫып торған, үҙемдең шәхси эшемдә аҫҡан кеше инем инде.

Үҙем өсөн аҡса эшләүҙең бер нисә мөһим ҡағиҙәһен ҡабул иткәнмен һәм шуларҙан тайшанмаҫҡа тырышам. Эшмәкәрлегемдең уңышлы барыуы ҡағиҙәләремдең дөрөҫ булыуын дәлилләйҙер, тип уйлайым. Улар тураһында гәзит уҡыусыларға ла бәйән иткем килә.

Мин һәр ваҡыт үҙемдең көнөмдө, аҙналыҡ һәм яҡынса йыллыҡ эштәремде планлаштырам. Алдыма әллә нисә төрлө маҡсаттар ҡуймайым, ә аныҡ маҡсат билдәләйем дә, шуны тормошҡа ашырыу өсөн нығышмалы эшләйем. Эште бер ҡасан да ғаилә, туғандар һәм дуҫтарҙан өҫтөн ҡуймайым. Минең уларҙы төрлө байрамдар менән ҡотлауым, тыуған көндәрен онотмауым, шылтыратҡандарында ваҡыт юҡлығына һылтанмауым улар араһында абруйлы итә. Шулай уҡ коллегаларым, эшлекле партнерҙарым менән дә һәр ваҡыт тығыҙ бәйләнештә ҡалырға тырышам, сөнки кешенең уйламаған ваҡытта ярҙамы тейеүе бар. Йоҡо һимертергә яратыу бер ҡасан да байырға ярҙам итмәй, шуға күрә йоҡо ваҡытын дөрөҫ һәм файҙалы итеп ойоштороу яйын күрәм. Телевизор экранына теләп ултырырға яратыусылар араһында аҡсалы кешеләрҙе һирәк осратырға була. Көндәр буйы төрлө сериал, тапшырыуҙарҙағы уңышлы кешеләр тормошо, уларҙың ҡаҙаныштары тураһында ҡарап ҡына кеҫә ҡалынайтып булмай. Бының өсөн ошо телевизорға бүлгән ваҡытты икенсе нәмәгә, мәсәлән ниндәйҙер курста белем алыуға, йүнәлтергә кәрәк. Белем - иң ҙур хазина. Берәй һөнәргә өйрәнеү әлеге ваҡытта кәрәкмәгән кеүек тойолһа ла, киләсәктә нәҡ ошо оҫталыҡ аҡса эшләүҙең иң ышанысты юлына әйләнергә мөмкин. Шәхсән үҙем һәр ваҡыт төрлө семинар, курстарға йөрөргә, китаптар уҡырға ваҡытымды йәлләмәйем. Уҡымышлы кеше һәр ваҡыт хөрмәткә лайыҡ. Ә хөрмәт, үҙ сиратында, төрлө ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итә, ышаныс өҫтәй. Матди уңышҡа өлгәшкән һәм ошо юҫыҡта юғарылыҡҡа етә алмағандар араһындағы ҙур бер айырма - телдә теш артында тота белеү ғәҙәте. Мин бер ҡасан да ниәтемде алдан һөйләп йөрөмәйем - был уңышҡа аяҡ салыусы бик "шәп" сара. Бына ошо, тәү ҡарашҡа ҡатмарлы булып күренгән, ләкин тормошҡа ашырыуҙа ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырмаған ҡағиҙәләр минә дә яҡлап та ярҙам итә.

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА яҙып алды.

---

**Кемдер күп һөйләй, ләкин аныҡ эш күрһәтмәй. Икенселәр иһә оҙон һүҙ ҡуйыртыуҙан ҡасып, көсөн һәм энергияһын эшкә йүнәлтә. Тормошта уларҙың тегеләре лә, былары ла күп, ләкин хөрмәт һәм абруй ҡаҙанғандарҙы тик икенселәр рәтендә генә осратырға була. Тап шундай эшлекле егеттәрҙең береһе, барыһы ла тотонорға ҡыймаған эшҡыуарлыҡты йүгәнләргә тәүәккәлләгән Вадим ХӘСӘНОВ менән әңгәмә ҡорорға насип булды.**

# СӘЙХУРБЫҘ...

## тимәк, сәйҙең сифатлыһын эсәйек



### Сифатлы сәй - "Дикша"

Үҙ эшен башларға уйлаған һәр кем, тәү сиратта, үҙе йәшәгән һәм эшмәкәрлек алып барырға теләгән төбәктә ниндәй тауарҙың йәки хеҙмәттең ҙур һорау менән ҡулланылыуын тикшерә, анализлай һәм һығымталар яһай. Эшлекле партнерҙарым менән оҙайлы тикшереүҙәр алып барғандан һуң Башҡортостан халҡын һинд сәйе менән тәьмин итеү тураһындағы фекерҙә туҡталдыҡ. Кеше ашамай-эсмәй йәшәй алмай, шуға күрә аҙыҡ-түлек менән эш итеүсе эшҡыуарҙың шөғөлө, күпселек осраҡта, килемһеҙ булмай. Ләкин ҡайҙандыр осһоҙға һатып алынған аҙыҡ-түлекте икенсе урында ҡыйбатҡа тәҡдим итеү генә беҙҙе хушһындырманы. Алдыбыҙға, ауыр һәм бороломалы булһа ла, халыҡты сифатлы сәй менән тәьмин итеү маҡсатын ҡуйҙыҡ һәм уны тормошҡа ашыра башланыҡ. Рәсәйгә сәйҙе иң күп экспортлаған илдән - Һиндостандан туранан-тура һатып алыуҙы иң яҡшыһы тип таптыҡ.

Бынан бер нисә йыл элек Һиндостандан алып киленгән сүпрә, лавр япрағы һәм башҡа төрлө тәмләткестәр һатыу нөктәләре асыуым был ил менән эшлекле хеҙмәттәшлек булдырыуға килтерҙе. Шуға күрә сәйгә бәйле эшмәкәрлекте башлау ауыр булманы. Халыҡ-ара эшҡыуарлыҡ алып барыу процесы, таможня эше менән яҡшы таныш булыуым бик тә ярап ҡалды. Хәҙер бер көйлө системаға һалынған, юғары кимәлдә һәм дөрөҫ итеп алып барылған халыҡ-ара бәйләнеш эшебеҙҙе алға ебәрергә булышлыҡ итә.

Ниндәй төр сәй алып килергә, тигән һорауҙы хәл иткәндә, тәү сиратта, уның сифатына, тәменә, хаҡының артыҡ ҡиммәт булмауына өҫтөнлөк яһаныҡ. Бөгөнгө көндә халыҡ иғтибарына өс төрлө варианта, "Дикша" исеме менән тәҡдим иткән сәйҙәребеҙ Һиндостанда үҫә, шунда йыйыла, эшкәртелә һәм үлсәп төрәлә. Сәйҙәрҙең бер ниндәй ҡушымтаһыҙ эшләнеүен ҡаты контроль аҫтында тоторға тырышабыҙ. Әлегә тиклем үлсәп төрәү эштәре Һиндостанда башҡарылды, ләкин доллар тирәһендә барған ваҡиғалар беҙҙе сеймалды үҙебеҙгә алып килеп төрәү тураһында фекергә этәрә. Оҙаҡламай ошо эшкә тотонорға иҫәп тотабыҙ. Ул саҡта ассортиментты күбәйтеп, сәйгә үҙебеҙҙең төбәктә үҫкән боланут (иванчай), мәтрүшкә, һары мәтрүшкә һәм башҡа шифалы үләндәр ҡушып эшләү ниәтен уйҙа йөрөтәбеҙ. Был, үҙ сиратында, үлән йыйып тапшырыусыларға килем дә килтерәсәк.

Рәсәй баҙарына сәй Һиндостан, Цейлон, Ҡытай, Вьетнамдан килтерелә һәм үҙебеҙҙең Краснодар крайында үҫкәне һатыуға сығарыла. Сәйгә ҡытлыҡ булмауы был илдәр һәм сәй етештереүсе төрлө компаниялар араһында ҙур конкуренция тыуҙыра. Үҙ тауарын үткәреү өсөн уларҙың һәр береһе төрлө ысулдар ҡуллана, төрлө юлдар эҙләй - сәйгә тәмләткестәр ҡуша, тышҡы биҙәлешенә күп иғтибар бүлә. Ләкин барлыҡ етештереүселәр ҙә намыҫлы эш итмәй һәм тәбиғи үләндәр урынына төрлө зарарлы матдәләр ҡушып, сәйҙең тәмен үҙгәртә. Уларҙың һаулыҡ өсөн ниндәй зыян килтереүен белеп тә бөтмәй ҡулланыусы.

### Сәй тураһында

Кеше әллә нисә быуат сәйҙең составын тикшерә, ләкин әле булһа тулыһынса өйрәнеп бөтә алмай. Сәй - химик составы буйынса иң ҡатмарлы булған үҫемлектәрҙең береһе һанала. Уның составында көмәндә 130-ҙан ашыу матдә бар. Үҙенә шулай уҡ бихисап һандағы витаминдар туплаған сәйҙең файҙалы һәм тәмле булыуы ла уны бөтәһенең дә яратҡан эсемлеге рәтенә индерә.

Сәйҙең иң сифатлыһы һәм сихәтлеһе - сәй ҡыуағының өҫкө япраҡтарынан етештерелгәне. Унан һуң ҡыуаҡтың урта өлөшөндә үҫкән япраҡтарҙан эшләнгән сәй килә. Иң һуңғы баҫҡыста - ҡыуаҡтың аҫҡы япраҡтарынан әҙерләнгән сәй тора. Рәсәйгә күберәгән аҫҡы япраҡтарҙан төрөлгән сәй килтерелә, ә өҫкө япраҡлы сәйҙәр бик һирәк осрай. Бик теләгәндә, уларҙы тик махсус магазиндарҙа һәм нығ ҡыйбат хаҡҡа ғына табырға мөмкин.

Сәйҙең сифатына һәм тәменә төрлө факторҙар тәьсир итә. Мәсәлән, Краснодар крайында сәй машина ярҙамында йыйыла. Уны аҫтан бергә эләккән ботаҡтарҙан, башҡа сүп-сарҙан айырып тормайҙар. Былай сәйҙең ниндәй сифаты тураһында һүҙ алып барырға мөмкин? Ә Һиндостанда эшсе ҡулдарҙың осһоҙ булыуы сәйҙе ҡул менән генә йыйырға мөмкинлек бирә. Күберәгән ҡатын-ҡыҙҙар йәлеп ителгән был эш йыл әйләнәһенә дауам итә. Бер ҡыуаҡтан йылына өс таптҡыр уңыш йыйыла. Шулай уҡ сәйҙең сифаты уның тау башында һәм үҙәндә үҫеүенән сығып та нығ айырыла. Һиндостанда сәйҙәр төньяҡта һәм көньяҡта үҫеүҙәренә ҡарап та бүленә. Беҙ тәҡдим иткән сәйҙәр төньяҡта, Ассам провинцияһында үҫә. Был сәйҙәр хуш еҫле булыуы, ҡатылығы, сифаты менән айырылып тора.

Ниндәй һауа шарттарында өлгөрөүенә ҡарап, сәйҙең тәме үҙгәрә, йәғни бер үк ҡыуаҡтан төрлө тәмдәге сәй эшләргә була. Шулай уҡ бер үк сәй ҡыуағы төрлө йылда төрлө тәмгә эйә булырға мөмкин. Шуға күрә сәй әҙерләүҙә технологтар иңендә ҙур яуаплылыҡ ята. Улар бер сортлы сәйҙең сифаты һәм тәме үҙгәрмәһен өсөн бөтә һөләттәрен, белемдәрен һәм тырышлыҡтарын һала. Һиндостанда сәй әҙерләүҙә әле булһа уҙған быуаттың башында ҡулланылған ҡоролмалар файҙалана. Был сәйҙең тәмен, сифатын үҙгәртмәйенсә һаҡларға ярҙам итә.

### Инвестор табыу - еңел эш түгел

Эшебеҙҙе быйыл ғына башлаһаҡ та, был идеяны бер нисә йыл күңелдә йөрөттөк, үҫтерҙек, уны тормошҡа ашырыу өсөн төрлө юлдар эҙләнек. Тәүге тапҡыр эшҡыуарлыҡты башлағанда үҙемдең шәхси аҡсамды тотондом һәм яндым. Шуға күрә икенсе тапҡыр ундай боҙло һыуға инеүҙән тыйылып, ниәтебеҙҙе финанс яҡтан нығытырлыҡ инвестор эҙләнек һәм уны Мәскәүҙә таптыҡ.

Инвесторҙы бер идея менән генә ҡыҙыҡтырып булмай. Был идеяның үҙе өсөн хәүефһеҙ икәнлегенә



һәм күпмелер ваҡыттан һуң килем килтерә башлаясағына ышанмайынса, бер кем дә финанс ярҙам күрһәтергә ашыҡмай. Шулай уҡ идеяны тәҡдим итеүсенең үҙе лә ҡыҙыҡһындыра ундай кешене. Эшҡыуарлыҡты яҡшы аңлаусы, был эштең бар нескәлеген белеүсе, үҙен етди кеше итеп күрһәтеүсе генә инвесторҙың иғтибарын йәлеп итергә мөмкин.

Инвестор эҙләү барышында бихисап ҡаршылыҡтар менән осраштыҡ, күп кенә аңлашылмаусылыҡтарҙы йырып үтергә тура килде. Күптәр ни өсөн беҙҙең сифатлы тауарҙы осһоҙ хаҡҡа тәҡдим итергә теләүебеҙҙе аңламай бер булды. Ләкин донъяла бөтә нәмә файҙа алыуға, аҡсаға ғына ҡайтып ҡалмай. Үҙеңдең эшең менән милләттәштәреңә, республика халҡына ниндәйҙер яҡшылыҡ, әҙ генә булһа ла күңел йылылығы алып киләһең икән - үҙе бер сауап, изге ғәмәл. Ә уны финанс йәһәтенән дә уңышлы итеү икеләтә ҡыуанысл хәл. Шуға күрә үҙебеҙҙең ниәтте лә тормошҡа ашырыу, беҙгә ышанысын белдергән кешене лә ауыр хәлгә ҡуймаç өсөн ең һыҙғанып эшләйбеҙ.

### Уңыш һәм уңышһыҙлыҡ һәр саҡ бергә

Һәр эштә лә юғары күтәрелеүҙәр һәм аҫҡа тәгәрәүҙәр була. Был, билгеләк тә, эшҡыуарлыҡҡа хас. Бер кемдең дә эшмәкәрлеге тигеҙ генә бара алмай. Ниндәйҙер мәлдә һин уңыш тулҡынының иң өҫтөндә, ә икенсе бер ваҡытта уңышһыҙлыҡтың төбөндә булыуың ихтимал. Ошо ике ситуациянан да лайыҡлы сыға белергә, уларҙы көйләргә өйрәнеү шарт эшҡыуарға. Ҙур уңышҡа өлгәшкәндә шатлыҡтан башты юғалтмаҫҡа, ә эштәр кирегә барғанда ауырлыҡтан баҙап ҡалмаҫҡа, ҡулды төшөрмәҫкә, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫкә кәрәк. Әгәр ҙә ошо ябай, әммә мөһим хәҡиҡәтте аңлағанда, барыһын да үтеп сығырға мөмкин. Эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшеүҙә, минеңсә, кешенең даланлы булыуы ла ҙур роль уйнай.

Эшҡыуарлыҡҡа тотоноусының үҙ маҡсатына табан туҡтамай атлауы ғына уңышҡа килтерергә мөмкин. Бер тапҡыр килеп сыҡманы икән, бар донъяға үс тотоп ултырыу урынһыҙ, тороп баҫырға һәм тағы ла бер тапҡыр ынтылырға кәрәк. Ул ынтылыштар араһында күпме ваҡыт үтеүе - бер көнмө, бер аҙнамы, әллә бер нисә йылмы - мөһим түгел. Әгәр ҙә үҙеңдә эшҡыуарлыҡта күрәһең икән, бөтә ихтыярыңды ҡулға ал да, алға ынтыл. Бәләкәй генә уңышһыҙлыҡтан да бөгөлөп төшөп, башын ҡомға йәшерергә тырышыусы бер ҡасан да эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшмәйәсәк. Был осраҡта иң яҡшыһы - ыҙаламаҫҡа, кире сыға алмаçлыҡ булып батҡанға тиклем был юлдан бөтөнләй китергә.

Эшҡыуарлыҡ, ғөмүмән, эш менән ғаилә араһында ара һаҡларға кәрәк. Эштә һин ғаилә хәлдәре тураһында һөйләмәйһең, өйҙәге уҙара мөнәсәбәттәр тураһында фекер алышмайһың, төрлө мәсьәләләр менән уртаҡлашмайһың, ә өйгә эштәге проблемаларҙы әйәртеп ҡайтмайһың. Шул саҡта ғына төрлө аңлашылмаусылыҡтарҙы урап үтергә һәм күңел тынызлығын һаҡларға мөмкин.

### Донъя оптимистар ҡулында

Мин донъяға тик позитив күҙлектән сығып ҡарарға тырышам. Төрлө күңелһеҙ моменттарҙа "батып" ҡалмаҫҡа, ә алға ынтылырға үҙемдә көс табам. Күңелендә ниндәй тойғоларға күберәк урын бирәһең, шул тиклем улар һине уратып-ҡармап ала. Әгәр ҙә һәр ваҡыт күрә алмаусанлыҡ, шикләнеүсәнлек, уңышһыҙлыҡ һәм башҡа ошондай кире тойғолар менән йәшәһәң, ысынбарлыҡта ла улар менән йыш осрашып торасаҡһың. Ә оптимистик рухлы, төшөнкөлөккә тиҙ бирелмәгән, һәр ситуациянан ниндәйҙер ыңғай һығымта эшләй белгән кешенең тормошо ла еңелерәк. Ғөмүмән, донъя оптимистар ҡулында, тип әйтер инем. Ләкин уларҙы һәр ваҡыт ҡуктә осоп йөрөүҙән ергә, ысынбарлыҡҡа төшөрөүсе реалистар ҙа кәрәк. Улар бер-берећен тигеҙләп тороуы менән яҡшы.

### Менталитет айырмалыҡтары

Эш барышында бик күп кешеләр менән осрашырға, аралашырға тура килә. Ә халыҡ-ара эшҡыуарлыҡ алып барғанда үҙебеҙҙең урындағы халыҡтан тыш, башҡа милләт вәкилдәре менән дә тығыҙ эшләйһең. Был өлкәлә ярайһы ғына ҙур тәжрибә туплаусы кеше буларак, төрлө милләт кешеләре араһында ни тиклем ҙур айырма булыуын ышаныслы әйтә алам. Икенсе менталитетҡа эйә булыусыларҙың үҙ-ара мөнәсәбәткә, эшлекле бәйләнештәргә ҡарашы бөтөнләй икенсе. Сит ил кешеләренә күберәк үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртыу, ваҡсыллыҡ, бөтә нәмәнән дә файҙа эҙләү кеүек билдәләр хас. Беҙҙәге кеүек кешелеклелек, икенсе кеше тураһында уйлау, үҙ мәнфәғәттәрендә өҫтөн ҡуйыу кеүек сифаттар уларға ят күренеш. Ауыр шарттар килеп тыуғанда эшлекле партнерыңды бер үҙен ҡалдырыу, командала эшләгәндә бөтә эште бер кешенең генә иңенә һалыу беҙҙә бик һирәк осрай. Ә уларҙа был ғәҙәти хәл. Беҙ нисек өйрәнгәнбеҙ? Әгәр ҙә нимәлер эшләргә вәғәҙә бирҙең икән, ҡырҡҡа ярылһаң - ярылаһың, әммә үтәйһең. Алдына ҡуйылған бурысты урын-еренә еткереп башҡараһың. Берҙәмлек тойғоһо ла көслә беҙҙә. Улар ошо йәһәттән беҙҙең менән ярыша алмай. Сит ил кешеләренең күбеһе менән дуҫтарса мөнәсәбәт ҡороу урынһыҙ, кешене ни тиклем оҙаҡ һәм яҡшы белһәң дә тик эш буйынса ғына хеҙмәттәшлек итеү күп төнөләүҙәрҙән азат итәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сәй - йәшәү ҡеүәтен тергеҙеүсе, организмдың һаҡлау көсөн арттырыусы, матурлыкты һәм һаулыкты һаҡлаусы иң ябай сараларҙың береһе. Халыҡ тарафынан бер ҡасан да һорау кәмемәгән был эсемлектең төрҙәре араһында иң сифатлыһын һәм яҡшыһын һайлап алыу көндән-көн ауырлаша. Ләкин бөгөнгө әңгәмәсем һәм уның хеҙмәттәштәре тарафынан республика баҙарҙарына сығарылған сәйҙең тик юғары сифатлы икәнәнә ышанырға була. Сөнки егетмен тигән егеттең һүҙе менән эше бер ҡасан да айырылмай.**

Гөлназ МАНАПОВА.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТЫУҒАН ЕРҘЕҢ ҠӘҘЕРЕН БЕЛӘЙЕК!

Яңы йыл байрамы етә башлаһа, күңелемә моңһоулыҡ, уй һалып, бер ваҡиға иҫкә төшә. Бынан ун йыл элек булды ул хәл. Барса халыҡ Яңы йыл мәшәҡәттәре менән мәж килгән саҡ. 30 декабрь көнө ине. Йыл аҙағы һәҙемтәләрен барлап, ҡағыҙ яуына күмелеп ултырғанда, бер ҡатын килеп инде лә, туп-тура миңә ҡарап өндәште:

- Һылыу, беҙгә юбилей үткәрергә ярҙам итмәçһегеҙме икән?

- Ҡасанға? - тим.

- Бөгөн, ике сәғәттән башлана. Баш тартмағыҙ инде, зинһар... - тип теҙеп китте апай кеше.

- Бөгөн? Булмай, апай. Уның өсөн әҙерләнергә кәрәк. Юбилярҙы күрмәй, белмәй тороп, нисек үткәрмәк кәрәк ул кисәне? Дежур һүҙҙәр һөйләргә яратмайым. Кешенең иҫтәлекле көнөндә ихлас һүҙҙәр, яҡты теләктәр яңғырарға, улары йөрәктән сығырға тейеш, - тим.

- Аңлайым, тик шулай килеп сыҡты... "Юҡ" тип әйтмәгеҙ инде, зинһар. Ағайым хаҡына тормай, аҡсалы кеше. Саф башҡортса һөйләгән тамада табығыҙ инде, тыуған төйәгемдә уҙғарылған тыуған көнөмдә шул иң ҙур бүләк буласаҡ, тине. Ә беҙҙең арала улай матур итеп башҡортса һөйләп, табынды алып барырлыҡ кешебеҙ юҡ. Зинһар, һылыу, кил инде, йәме. Универмаг ҡаршыһындағы ашханала үтә, - тине лә, боролоп китеп барҙы апай.

- Бөгөн район үҙәгендә Яңы йыл тантанаһы, эшем дә күп,- тип һөйләнеп ҡалдым. "Бынау ҡымғыуыт ваҡытта кешегә юбилей үткәреү ҡайғыһымы! Тапҡандар ваҡыт..."- тип һөйләнә-һөйләнә ҡағыҙҙарымды йыям. Шул уҡ ваҡытта апайҙың "Тыуған төйәгендә уҙғарған тыуған көнө" тигән һүҙҙәре уйымды икенсе яҡҡа бора...

Ҡыҫҡаһы, билдәләнгән ваҡытта мин ашханала инем инде. Яңы йыл алдынан була торған күңел елкеткес тойғолар менән биҙәлгән залға үтәм. Ҡунаҡтар йыйыла башлағайны. "Ғүмерҙә булмаған хәл, юбиляр тураһында бер нәмә белмәй, әҙерләкһеҙ килдем", - тигән борсолоуымды:

-Һаумыһығыҙ, һылыу, һеҙме юбилейҙы алып барыусы? - тигән тауыш өҙҙө. Алдымда сәстәренә сал йүгергән, бәһлеүән булмаһа ла, тәҙ, мыҡты кәүҙәле, һөйкөмлө ағай баҫып тора.

- Мин юбиляр булам. Аптырамағыҙ инде шулай ҡабалан саҡырыуға. Бөгөн минең тыуған көнөм. Туғандарымды йыйып, бер рәхәтләнеп үҙ телебеҙҙә аралашып ултырғым килгәйне...

- Беләһегеҙме, кисә үткәрер өсөн аппаратура кәрәк. Йырсы булһа, тағы ла күркәмерәк булыр ине байрамығыҙ. Унан һуң, мин бит һеҙҙең турала бөтөнләй белмәйем. Белмәгән кеше тураһында нимә әйтәһең... Һеҙҙең турала хәбәрҙәр булһам, алып барыуы еңелерәк, һүҙҙәр бөҙрәрәк, юбилей ихласыраҡ булыр ине...

- Һылыу, әйҙә, шулай итәйек, һеҙ миңә тантана үткәреү хаҡын әйтегеҙ, мин һеҙгә хәҙер үк түләйем. Аппаратураһыҙ эшләүе ҡыйын булмаç, туғандарым шаулашмай ғына ултырыр. Уңайһыҙлыҡтар өсөн түләрмен, кәрәк булһа. Минең был кисәне йыр, бейеү менән шаулатып үткәрер аҡсам бар, тик теләгем юҡ. Минең тын ғына ҡалып, үҙ телебеҙҙең моңон ишеткем килә. Башҡортса һөйләгеҙ, миңә бүтән бер нәмә лә кәрәкмәй. Мин бер нисә көнгә Германиянан ҡайттым, туғандарым менән тыуған көнөмдө билдәләргә, Яңы йылды ҡаршыларға. Әйҙәгеҙ, башлайыҡ, тик сығып китмәгеҙ берүк, - тине лә ағай түргә инеп ултырҙы.

Ысынлап та, ағайҙың туғандары шаулашып, эскәнен эсенә һыйҙырмай былғанлап ултырманы. Матур, ихлас үтте юбилей. Йырлашып, үҙ-ара һөйләшеп, көлөшөп күңел астылар. Шунлыһына ла иғтибар иттем, юбилей, тип, ҙур бүләк биреше булманы. Бәйләнгән нәски, бирсәткә, сувенир һауытта бал бүләк иттеләр. Ағайым, бүләк алмағыҙ, барыбер алып китмәйем, тип әйтте, тип аңлатты быны баяғы ҡатын.

Һуңынан универмаг ҡаршыһында үткән Яңы йыл байрамына сыҡты ҡунаҡтар. Мин дә шунда ашыҡтым. Ҡупшы булып ирәйеп ултырған шыршы, ишелеп яуған эре ҡар бөртөктәренә, күңелле итеп көлөшкән хеҙмәттәштәремә ҡарап, кинәнеп торам шулай. Уларҙың берҙәм һөйөнөсө күңелемә бәреп инә. "Иртәгә мөғжизәле, тылсымлы, көтөп алған яңы йыл тыуасаҡ. Байрамды көтөүе күңеллерәк, бәхетте лә шулай..."- тип уйлап, әллә ниндәй сихри солғанышта торғанда юбиляр ағай яныма килеп баҫты.

- Башығыҙға киймәгәнһегеҙ, өшөйһөгөҙ бит , - тим.

- Юҡ, һылыу, өшөмәйем. Ниндәй матур кис... Бынау ябалаҡлап яуған ҡары ла минең байрам хөрмәтенә кеүек. Рәхмәт, һылыу, юбилей өсөн. Мөңәрләгән саҡрым үтеп, ғәзиз йәнтөйәгемдә яҡындарым менән ғүмер байрамын билдәләйем, тип, ата-әсәм телендә рәхәтләнеп аралашыр өсөн ҡайттым. Һин, бәлки, был ағайҙың ғаиләһе юҡ микән ни, тип аптырағанһыңдыр. Бар минең ғаиләм: ҡатыным, ике улым бар. Тик беҙ бер-беребеҙгә ят кешеләр. Ҡатыным украинка, әрме хеҙмәтендә танышып, өйләнештек. Йәш саҡта иғтибар итмәгәнмен, донъя ҡыуып, балалар үҫтереп, баҡтиһәң, булмышыбыҙ, рухи донъябыҙ бөтөнләй ике төрлө булған... Германияла йәшәгәнебеҙгә лә байтаҡ инде. Матди яҡтан барыһы ла шөкөр, ә бына күңел донъяһы... Ҡатыным менән аралар һыуынды, уртаҡ уй, уртаҡ йылылыҡ юҡ. Ул байрамдарҙа үҙ йолаһын тота, улдарым урыҫ, немец телендә һөйләшә. Минең туған телем улар өсөн ете ят, белмәйҙәр, белергә лә теләмәйҙәр. Элек йәшлек менән беленмәгән, ә хәҙер ологая килә үҙ телемдә һөйләшкем, йырлағым, йола, традицияларҙы тотҡом килә. Тик... Шуға ла йөрәкһеп ҡайттым әле... Беләһегеҙме, мин нимә уйланым ошо минутта, киләһе юбилейыма ҡатынымды, улдарымды мотлаҡ алып ҡайтасаҡмын. Ишетһендәр минең Башҡортостанымдың йыр-моңон, туған телемдең аһәңен! Бәлки, бер-беребеҙҙе аңлашып, элеккесә йәшәп китербеҙ... Һине саҡырырмын, һылыу! Килештекме?..

Сәхнәнән йыр ағыла. Ябалаҡлап яуған ҡарҙар байрамға килгән һәр кемдең иңенән ҡосоп, аҡлыҡ, сафлыҡ вәғәҙәләй. Тын ҡалған ағайҙың йөҙөнә бағам. Мең төрлө ҡар бөртөктәре уның битенән аҡҡан күҙ йәштәренә мансыла...

- Ихх, һылыу, һеҙ аңламайһығыҙ тыуған яҡтың ҡәҙерен, тел, моң ҡәҙерен. Һеҙ уны көн дә ишетәһегеҙ. Ә мин ошо минутта сарсап килеп шишмә һыуына ҡапланған юлсы кеүекмен....

Был ваҡиғаға бер нисә йыл үткәс, теге апайҙы урамда осраттым. Һөйләшеп киттек. Германияла йәшәгән ағайҙың хәлен һораштым. Апай ауыр көрһөнөп :

- Үлде бит ул, һылыу. Ҡайтып китеп, 3-4 ай ҙа үтмәгәндер, ҡаты ауырып, түшәккә йығылды. Сит ерҙәрҙә ятып ҡалды инде ағайым... - тине.

Һәр йыл һайын яңы йыл алдынан ошо ваҡиға күңел сөмбәйҙәрендә ҡымшанып ҡуя. Яңы йыл алды ығы-зығылы, таныҡ мәшәҡәттәр менән йөрөгәндә әллә ҡайҙарҙан тыуған төйәгенә ашҡынып ҡайтҡан ағайҙың күңел торошо миңә ҡускән кеүек. Абайламаҫтан ошондай изге теләк ярала тел осонда: Яңы йылдарҙы үҙ еребеҙҙә яҡындарыбыҙ менән имен-аман ҡаршы алайыҡ. Ожмахтарға тиң төйәгебеҙҙә тыныс ҡына ғүмер кисерәйек, йыр-моңдарыбыҙға күмелеп, ата-бабаларыбыҙ йолаһын тотоп, ғәзиз кешеләребеҙҙе, туғандарыбыҙҙы өйөп-төйөп, шөкөр итеп!

Нурия ҠУНЫСБАЕВА.

✓ *"Һеҙҙең телегеҙҙәге ике өн: "ҫ" менән "ҙ"-ға һәйкәл ҡуйырға кәрәк. Ошо ике өнөгөҙ, үҙегеҙҙең боронғолоғоғоҙ менән һеҙ башҡа төрки халыҡтарынан айырылып тораһығыҙ", - тиҙәр.*

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТЕАТРҘАРҒА ЙӨРӨЙӨК!

**Беҙ шундай бәхетле осорҙа йәшәйбеҙ, үҙ дәүләтебеҙ, дәүләт статусындағы үҙ телебеҙ бар. Башҡортса йыр-моңдар тыңлай, спектаклдәр ҡарай алабыҙ. Ҡарай алабыҙ ғына ла түгел, театрҙарҙы һайлау мөмкинлегебеҙ бар. Шуға ла мин гәзит уҡыусыларға, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең милли сәнғәт усаҡтарын һыуытмайыҡ, тип оран ташлағым килә.**

Һөнәрем буйынса инженермын, техник белем алғанмын. Сәнғәтте лә эшем буйынса кәрәк булғанға түгел, ә күңелем ҡушыуы буйынса яратам. Бер аҙ ситтә эшләп ҡайтырға ла тура килде. Үҙеңдең ерендә йәшәгәндә генә тыуған ер ҡәҙере тойолмай икән, мин дә үҙ телебеҙҙең моңона һыуһап ҡайттым. Бигерәк тә милли театрҙарыбыҙҙың профессиональ кимәле мине һөйөндөрә. Баш ҡала урынлашҡан төрлө театрҙарға йөрөйөм, бигерәк тә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры, БР Рус дәүләт драма театры, "Проект The Театр" тигән шәхси театр оҡшай. Башҡорт театры репертуарын яҡшы беләм һәм унда тамашасының иғтибарын йәлеп итерлек лайыҡлы әҫәрҙәр бик күп. Үткән ижади миҙгелдең иң сағыу спектакле - "Кара йөҙҙәр"ҙе генә алайыҡ. Ул театрҙың йөҙөн билдәләй торған спектакль, уны һәр кем ҡарарға тейеш. Ниндәй генә заманда йәшәмәйек, наҙанлыҡ һәм аңралыҡ күпме насар эштәргә килтереүе ихтимал. Юҡҡа ғына ғилемле булыуҙы мотлаҡ һанамаған ата-бабаларыбыҙ. Бөгөнгө көнгә биш тапҡыр ҡарағанмын "Кара йөҙҙәр"ҙе, барған һайын үҙемә яңылыҡ асып ҡайтам. Йолалар бик матур сағыла бында. Ғөмүмән, башҡорт йолалары, башҡорт холоҡ-ҡылығы сағылған спектаклдәрҙе оҡшатам, "Ҡоҙаса", "Шәүрәкәй" шундайҙар рәтенән. "Кара йөҙҙәр" спектаклендә ике актриса - Римма Ҡаһарманова менән Гөлнара Ҡаҙаҡбаеваны астым үҙем өсөн. Римманың - "Ай тотолған төндә" спектаклендәге Шәфәҡ, "Джут" спектаклендәге Сәүле, Гөлнараның "Мин - ҡатынҡыҙ"ҙағы ролдәрендә лә уларҙың матурлығы ла, таланты тулыһынса сағылыш таба. Артур Кәбировтың да "Кара йөҙҙәр"ҙә иң яҡшы роле, минеңсә. Финалда ул шул тиклем асыла, ҡайғыһы ҡара һағыш булып йөҙөнә яғыла. Лилиә Ғәлинаның ошо уҡ спектаклдәге Ғәли, "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға" мюзиклындағы Ҡолонсағы бигерәк шәп. Театрҙың йәш актерҙары башҡорт театрының дәрәжәһен белеп уйнай, тиер инем. Мәҫәлән, "Ҡаһым түрә"лә Артур Ҡунаҡбаев менән Урал Әминевтың уйынын ҡарап, шундай ҙур кинәнес алаһың. Уралдың хатта икенсе пландағы ролдәре лә сағыу, "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр" драмаһын ғына иҫегеҙгә төшөрөгөҙ. Урал Әминевтың Рудиһы, Диуанаһы, Руслан Хайсаровтың Ҡара юрғаһы, Зилиә Хәлилованың Элинаһы - һанай башлаһаң, һәр береһенең бынамын тигән ролдәрен күрергә була. Композитор Илшат Яхин үҙе бер хазина театр сәнғәте өсөн. Шул уҡ "Кара йөҙҙәр"ҙәге унын көйө күңелдән бер ҙә китмәй, ҡолаҡ осонда сыңлап тик тора.

Быларҙы мин ни өсөн оҙон-оҙаҡ итеп һөйләп торам һуң? Һеҙ ҙә ошо спектаклдәрҙе барып күрһен, мин кисергән тойғоларҙы кисерһен, тием. Башҡорт халҡы талантлы ул, тип өйҙә ултырһағыҙ, һеҙ ошо таланттарға үҫергә мөмкинлек бирмәйһегеҙ. Һәр артисҡа тамашасы кәрәк, шунһыҙ театр юҡ. Әлбиттә, спектакль һеҙгә оҡшауы, шулай уҡ оҡшамауы ла бар. Тик бынан һеҙ бер нәмә лә юғалтмайһығыҙ. Шул уҡ "Һаран"ды Хөрмәтулла Үтәшевтың мең ҡырлы талантын күрер өсөн генә булһа ла барып ҡарай алаһығыҙ. Алмас Әмировтың "Әлифбанан бер себеш" моноспектаклен һаман күрмәгәнһегеҙме? Юҡ икән, тимәк, репертуарҙан төшөп ҡалмаҫ элек барып ҡалығыҙ. Балалар өсөн дә яҡшы спектаклдәр күп. Әлеге мәлдә Илсур Ҡаҙаҡбаевтың "Зөбәржәт ҡала тылсымсыһы" әкиәте бара. "Ак пароход", "Руди", "Кәкүк ояһы", "Мулла" кеүек һирәк-һаяҡ күрһәтелгән спектаклдәргә әлегеү инде ул тағы ла ҙур шатлыҡ. Зауығыбыҙҙы үҫтерәйек, милләттәштәр, театрҙарға йөрөйөк!

**Дамир ҒӘББӘСОВ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БЕР-БЕРЕБЕҘҘЕ КҮТӘРМӘЛӘРГӘ ӨЙРӘНӘЙЕК!

**Әлеге яҙмабыҙҙа танылған әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре кандидаты, доцент, Башҡортостан Яҙыусылар Союзының әҙәби тәнҡит бүлеге етәксеһе Зәки ӘЛИБАЕВтың геройлыҡ, лидерлыҡ тураһындағы фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**



## Һәр замандың үҙ геройы

Заманды геройҙарһыҙ күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Батырҙар, энтузиаст кешеләр, лидерҙар - уларҙы төрлөсә атап йөрөтәбеҙ. Улар йәшәйештең һәр өлкәһендә бар. Йәшәйештең ҡайһылыр өлкәһендә улар күберәк, ҡайһыһындалыр - аҙыраҡ, тиеү ҙә дөрөҫ булмаҫтыр. Беҙҙең өсөн яп-яҡын тарихты - дәһшәтле Бөйөк Ватан һуғышын ғына алайыҡ әле. Ошо һуғышҡа аҙ ғына һанлы халыҡ нисәмә герой биргән? Дошман амбразураһын үҙ күкрәге менән кем ҡаплаған? Кем самолетта осоп, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған? Кем атта ҡылыс менән дошманға ташланған? Башҡорт егеттәре бит! Башҡорттарҙың Бөйөк Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтарын һанап бөтөрөрлөк түгел. Ә геройҙарҙың ҡайһылары иң юғары кимәлдә лә, кемдәре түбән кимәлдә һуң? Был һорауға ла ҡәтғи яуап: бөтөнөһө лә бер дәрәжәлә.

Ә хәҙер беҙ кемде бындай оло исем менән атай алабыҙ? Ниндәй һөнәр эйәһен? Ниндәй идея кешеһен? Геройҙы герой тип атар өсөн беҙ ниндәй ҡиблаға йөҙ борабыҙ? Минеңсә, ул мотлаҡ рәүештә диндар булырға тейеш. Әммә дингә һуҡырҙарса табыныусы түгел. Ғөмүмән, был донъяла халҡыбыҙҙың һәм уның улдарының ғына фанаты булыуҙы дөрөҫ тип иҫәпләйем. Кеше башҡа юҫыҡта фанат булдымы - хәлдәр хөрт: сиктәр, сама төшөнсәһе, һалҡын, зирәк аҡыл менән эш итеү - барыһы ла онотола.

## Ә кем ул беҙҙең көн геройы?

Ете быуын ата-бабалары ғына түгел, етмеш быуын олаталары ошо ерҙе бер кемгә лә бирмәй йәшәгән икән, бөгөнгө вариҫтары уларҙы дауам итә һәм ҡартаталарының аманатына тоғро икән - шулар беҙҙең геройҙар. Минең халҡыма тоғролоғом да, геройлығым да шуға ҡайтып ҡалыр ине. Бына, мәҫәлән, аяҡһыҙ көйөнсә олимпиадаларҙа еңеү яулаған Ирек Зарипов һәр сығышында: "Мин - башҡорт", - тип әйтә. Ул - герой. Уның ауыҙынан был һүҙҙе бер кем дә тартып сығармай - ул үҙенән-үҙе килеп сыға. Йөрәк ҡушыуы буйынса. Айнур Аҫҡаров та башҡорт халҡының көнитмешен сағылдырған фильмдар төшөрә, уларҙа режиссерҙың халҡына, еренә һөйөүе ярылып ята икән - йәштәр өсөн ул да өлгө булырлыҡ шәхес. Тағы, Тамара Танһыҡҡужина үҙ сығышында: "Мин олатайым тәрбиәһе алдым", - тип әйтә икән, тимәк, ул да тамырҙарына тоғро, тигән һүҙ, ул да - герой. Төрлө өлкәлә табырға була бөгөнгө көн геройҙарын. Элек геройҙар булған ул, хәҙер - юҡ, тип әйтеү бөтөнләй дөрөҫ түгел. Иң тәүҙә эргәбеҙҙәге - инеһеҙ кемгә терәлеп тора, шул геройҙы күрергә өйрәнәйек. Бер-беребеҙҙе күтәрмәләргә, дәртләндерергә өйрәнәйек. Бер-береһенә ярҙам итеү йәһәтенән яҙыусылар араһында ыңғай миҫалдар бар. Заманында йәш шағирҙарҙы кемдәр күтәргән? Уҙған быуаттың 60-сы йылдарында Рәми ағай йәш шағирҙарҙы үҙенең эргәһенә йыйған. Уларға кәңәштәр биргән, тәнҡитләгән. Уның эргәһендә Тимер Йосопов, Сафуан Әлибаев, Рауил Бикбаев, Динис Бүләков һымаҡ йәштәр ҡанат нығытҡан. Әллә күпме шағирҙар "Рәми мәктәбен" үткән. Был йәштәр тәүҙәрәк Рәми ағай кимәлендә әҫәр яҙа ла алмаған ул яҙыуға, ләкин аҙаҡ остаздары менән тиң кимәлгә күтәрелгән. Бына ул - герой! Ә ни өсөн 60-сы йылдарҙа "Рәми - герой!" тип бөрөү ҙә әйтмәгән? Ул беҙҙең өсөн хәҙер генә батыр. Уны бит заманында Өфөлә эшләргә лә мөмкинлек бирмәйенсә, районға ҡайтырға мәжбүр иткәндәр. Хәҙер уйлаһаң, Рәми ағайҙың кисергәндәре романтика һымаҡ. Ә уға романтика булдымы икән ошо ҡыйырһытыуҙар?..

## Телһөйәрлек тәрбиәлә

Тормошта бер сирҡаныс алмайынса булмай ул. Мәҫәлән, мин студенттарға ниндәйҙер ижади эш бирһәм, улар араһында: "Беҙ яҙа белмәйбеҙ", - тиеүселәр ҙә осрай. Мин, яҙа белмәйбеҙ, тимәгеҙ, тәүҙә яҙып килтерегеҙ, һеҙҙең яҙғандарҙы ҡарайыҡ, тим. Әгәр ҙә мин шағир икән, Мостай Кәрим һымаҡ яҙырға тейешмен, тигән һүҙ түгел бит ул. Мин яҙыусы икән, Һәҙиә Дәүләтшина романы кеүек роман яҙа алыу-алмау ҙа шарт түгел. Һин, һис юғы, бер битлек әкиәт яҙып ҡара, киләсәктә ул әкиәтте балаңа уҡырһың. Тик балаң һин яҙғандарҙы аңларлыҡ, һинең һөйләгәндәрең унда телһөйәрлек, илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләрлек булһын. Башҡорт халыҡ ижадындағы әкиәттәр - шул уҡ патриотик тәрбиә ул. Ҡуян менән төлкө тураһындағы әкиәтте генә алайыҡ. Төлкөнөң ҡуяндың өйөн баҫып алып килеп кереүендә сағыла ла инде милләттәр араһындағы йә башҡа төрлө килмешәклек. Ошо әкиәттән сығып, милләт-ара низағтарҙы ла аңлатырға була.

## Үҙ эшен белгәндәрҙе үҫтерәйек

Бөтә кеше бейеүсе, йырсы, шағир, инженер була алмай. Мин бейей ҙә, йырлай ҙа белмәйем. Әммә был мөһим түгел, минең йырлай, бейей белгәндәрҙе тыңлауым кәрәк, күреүем кәрәк. Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбленең йәки Риф Ғәбитовтың бейеүен ҡарағандан һуң мин бейеүсе булып китмәйем, ә ябай ғына эстетик зауыҡ алам. Шуның өсөн һәр кем үҙенең өлкәһендә профессионал булһын. Әгәр ҙә һәр кем ошо үҙе белгән эше менән башҡорт иленең үҫеүенә, йәшәүенә булышлыҡ итә икән, киләсәгебеҙ яҡты буласаҡ, тигән һүҙ.

## "Һеҙҙең "ҫ" менән "ҙ"-ға һәйкәл ҡуйырға кәрәк"

Беҙ Алтай университеты менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ һәм студенттарҙы унда үткән сараларға, олимпиадаларға алып барабыҙ. Унда үткән сараларға төрки ҡәүемендәге халыҡтар йыйыла, шунда беҙҙе яратып, маҡтап: "Һеҙҙең телегеҙҙәге ике өн: "ҫ" менән "ҙ"-ға һәйкәл ҡуйырға кәрәк", - тиҙәр. "Ошо ике өнөгөҙ, үҙегеҙҙең боронғолоғоғоҙ менән һеҙ башҡа төрки халыҡтарынан айырылып тораһығыҙ", - тиҙәр.

Бөгөн күп кенә балалар, йәштәр, урта йәштәгеләр тыуған телебеҙҙә һөйләшеүҙән тартына. Уларға Алтайҙа ишеткән әлеге һүҙҙәрҙе ишеттереү ҙә ыңғай һөҙөмтә бирәсәк. Ошондай миҫалдарҙы башҡа өлкәләрҙә лә табырға була. Уларҙы ишеттерәйек, милләтте күтәрмәләй йөрөйөк.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

**Германияла йәшәгән яҡташыбыҙ, журналист, режиссер Нәсүр ЙӨРӨШБАЕВтың исеме гәзит уҡыусыларға яҡшы таныш. Уның Беренсе донъя һуғышы ваҡытында Берлин эргәһендәге мосолмандар лагерында булған әсирҙәрҙең пластинкаларға яҙҙырылған тауыштарын табыуы хаҡында ла, Германияла ерләнгән һалдаттарҙың ҡәберҙәрен эҙләүе тураһында ла, кинолар төшөрөүе тураһында ла яҙғайныҡ инде. Үҙ милләтенең тоғро улы булыуы менән генә түгел, ана шундай бөйөк эштәре менән дә ситтәр араһында дан-шөһрәт ҡаҙанған шәхестең сираттағы тапҡыр республикабыҙға ҡайтыуын ишеткәс, "Тағы ниндәй эштәр менән янып йөрөйһөгөҙ?" тип мөрәжәғәт итмәй булдыра алманыҡ.**

# БАШҠОРТ РУХЫ ФЕНОМЕНЫ...

## Европаны бөгөн дә аптырата



### Уралдағы Лейпциг

1992 йылда сираттағы тапҡыр ҡайҙалыр китепме, ҡайтыпмы барғанда, алыҫ юлдарға йөрөүсе йөк машинаһына ултырып алдым. Водитель минең телмәремдәге акцент тураһында һүҙ сығарғас, үҙемдең иң боронғо ырыуҙарҙың береһе - ғәйнә ырыуы башҡорто икәнемде, әлеге мәлдә Германияның Лейпциг ҡалаһында йәшәүемде әйттем. "Беҙҙә лә Лейпциг та, Париж да бар", - тине ул миңә яуап итеп. Ҡыҙыҡһына башланым. Баҡтиһәң, Силәбе өлкәһенең Варна районында Лейпциг тип аталған ауыл бар икән. Беләһегеҙҙер, 1913 йылда Германияның Лейпциг ҡалаһында тарихҡа Халыҡтар һуғышы тип инеп ҡалған ваҡиға - Европаны Наполеон илбаҫарҙарынан азат итеүгә 100 йыл тулыуға арнап, һәйкәл асыла. Тап ошо һуғышта 5 башҡорт полкы ҡатнаша. Халыҡтар һуғышының 190 йыллығын байрам иткәндә беҙ башҡорт яугирҙары иҫтәлегенә таш ҡуйҙыҡ. Унда башҡорт, рус, немец телендә: "1813 йылғы Халыҡтар һуғышы. Улдары Рәсәй әрмеһендә хеҙмәт иткән башҡорт халҡы хөрмәтенә" тип яҙылған. Таш аҫтына ҡурай һалып ҡалдырҙыҡ, берәй ҡасан археологтар былдағы ерҙә ҡаҙыныу эштәре алып барһа, улар башҡорт ҡурайын табасаҡ.

Силәбенең Парижын бәләкәй генә Эйфель башняһы биҙәй, ни өсөн Лейпцигҡа Халыҡтар һуғышы һәйкәле күсермәһен ҡуймаҫҡа, тип уйланым да, "Уралдағы Лейпциг" тигән проекттың тормошҡа ашыра башланым. Ҡала буйлап башҡорт милли кейемендә йөрөп, реклама яһаным. Германияла был идея менән ҡыҙыҡһыныусы кешеләр ҙә табылды, аҡса йыйып, уның нигеҙен һалдыҡ та инде. Был турала тағы ла китап яҙам һәм фильм төшөрәм. Өс өлөштән торған китапты Мәскәү финанслай, өс сериянан торған фильмды - Германия. Йәй немец дуҫтарым менән "Уралдағы Лейпциг" һәйкәленә нигеҙ ҡойғанда урындағы халыҡ менән яҡындан таныштыҡ, һабантуйҙарға йөрөнөк. Ауыл халҡы менән футбол уйнаныҡ, немецтар еңә башлағас, ҡапҡасы булараҡ, бер тупты юрамал индереп ебәрҙем, шулай итеп, дуҫлыҡ еңде. Эйе, немецтар футболды шәп уйнай, улар Бразилияны еңде, әммә бында бөтөнләй икенсе уйын. Бында уға ҙур фәлсәфә һалынған, шуға ла йөрәк менән уйнау мөһимерәк ине. Ҡасандыр башҡорт яугирҙары бер нисә тапҡыр рус ғәскәре составында Европаны үҙ баҫҡынсыларынан уҡ азат итә. Хәҙер Европа был турала онотҡан, юғиһә, Рәсәйгә ҡаршы санкциялар иғлан итерҙәр инеме ни? Тарихтан һабаҡ ала белергә кәрәк, шул саҡта ғына донъялар имен торасаҡ.

### Төньяҡ амурҙары

"Уралдағы Лейпциг" һәйкәленә башҡорт уғын да ҡуйырға ниәтләйем. Тарихи сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, 1814 йылда Изге Лауренция сиркәүе янында Тюрингия кенәзлеге принцы Гюнтер уҡ-һаҙаҡтың көсөнә шик белдергәс, дүрт башҡорт йәйәнән атыу оҫталығын күрһәтә. Бер яугирҙың уғы сиркәү көмбәҙенең төбөн тишеп ҡаҙала. Ағас уҡ серегәс, уны ҡоросҡа алыштыралар. Ҡорос уҡты 2013 йылда алтынға алыштырҙыҡ, сиркәү стенаһына Азат Ҡужин биҙәгән алтаҡта ҡуйҙыҡ. Был турала ла фильм төшөрәм, ул "Төньяҡ амурҙары: 200 йылдан һуң" тип аталасаҡ. Олатайҙарыбыҙ 2 быуат элек бөтөн Европаға башҡорттарҙың кем икәнен күрһәткән. Уларҙы бик яратҡандар, башҡорттар Европа халҡы хәтерендә әкиәт геройҙары кеүек булып һаҡланып ҡалған. Бөйөк Гете ла үҙенең улы Альбертҡа: "Мин бында батша улдары, солтандар күрҙем", - тип яҙа. Сәй эсергә саҡыра, беҙҙең егеттәр уға уҡ менән йәйә бүләк итә, Гете уларҙы, камин өҫтөнә элеп ҡуйҙым, тип яҙа хатында. Хәҙер күпме һыу аҡты, Германияға башҡорттарҙың яңы быуыны килде. Бөгөнгө немецтар, ғөмүмән, Европа халҡы уларға ниндәй мөнәсәбәттә - фильмда һүҙ ошо тура буласаҡ. Ысынында иһә, мәғлүмәт ҡан менән быуындан-быуынға тапшырыла килә бит ул, 200 йылдан һуң да улар беҙгә һаман һоҡланып ҡарай. Башҡортостандан "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарих реконструкция клубы Халыҡтар һуғышын тергеҙеү сараһында килгәндә 200 йыл элек ата-бабаларыбыҙ Лейпциг эргәһендә усаҡ яғып, нисек ултырған, әле лә шулай ултырабыҙ. Ул ваҡыттағы кеүек, бөгөн дә башҡорттар иғтибар үҙәгендә. Бөтәһе лә уктарҙы, йәйәләрҙе тотоп ҡарай, иҫтәлеккә нимәләр алып ҡалырға тырыша, хатта башҡорттар менән төңгә усаҡ эргәһендә ултырыу ҙа улар өсөн ҙур дәрәжә. Башҡорттар ат һораһа, аттар әҙерләп торалар. Илдар Шәйәхмәтов немец атының ҡолағына башҡортса нимәләр шыбырлай, ат ергә ята, тағы шыбырлаһа - тора, быны ҡарап торған немецтар аптырауҙан нимә эшләргә белмәй. Былар барыһы ла башҡорт рухы феномены тураһында һөйләй түгелме һуң?!

### Жәүәт менән Вольтер

Силәбелә булғандан һуң, Магнитогорск ҡалаһына киттем, сөнки унда "Ике әсир: Жәүәт менән Вольтер" фильмының бер өлөшөн төшөрөргә тейеш инем. Фильм Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арнала. Өфөлә йәшәгән геройым Жәүәткә 96 йәш, ул Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көндәренән үк һуғышҡа алына. Уларҙың отряды 3 көн фашистарҙы үткәрмәй тора, ҡоралдары бөткәндән һуң да сигенәләр, дошманға бирелмәйҙәр, тик һуңыраҡ әсиргә төшәләр. Ул 7 концентрацион лагерҙа ултыра, 3 тапҡыр ҡаса, тотола, туҡмала, атыла, аҫыла. Иң аҙаҡҡы тапҡыр ҡасҡанында беҙҙең ғәскәрҙәр уны табып ала һәм танкка ултыртып, Берлинға ебәрә. Берлинды алыуҙа ҡатнаша, унан һуң Эльбаға китә. Һөйләүе буйынса, уның шәхси эшенә ҡыҙыл өсмөйөш ҡуйылған була, иң ҡурҡыныс енәйәтселәргә генә былдай билдә ҡуйғандар.

Тағы бер хәрби - Вольтер - Магнитогорск ҡалаһында әсирлектә була. Шәмбе һайын мунсаға йөрөтә, таҙа кейемдәр, түшәк-яраҡтары бирә инеләр, йәкшәмбе ял иттек, тип һөйләй. Эшләгәне өсөн аҡса түләйҙәр, ул уны урындағы ҡатындарға биреп тора. Күпмелер ваҡыттан һуң яраҡтан кеше ен осрата, атай була. Һуғыш тамамланғас, хатта ҡайтырға ла теләмәй. Германияла уның менән осрашҡанда: "Әсирлек тормошоҙҙа ниндәй эҙ ҡалдырҙы?" - тип һорайым. "Был ғүмеремдең иң яҡшы йылдары ине, бөтөн хеҙмәттәштәрем һәләк булды, мин иҫән ҡалдым, мин ундағы халыҡтың изгелеген күрҙем, ҡайны саҡта уйлап ҡуям, бәлки, мин әсирлектә булмағанмындыр ҙа?" - ти ул.

Фильмда Жәүәт менән Вольтерҙы осраштырырға теләгәйнем, тик һөйләшеп бөткәс кенә, Жәүәт ағай ҡулын һындырып, Германияға килә алманы. Сюжет буйынса, уларҙың береһе - Көнбайыш Берлин, икенсеһе Көнсығыш Берлин яғынан килеп, Бранденбург ҡапҡалары эргәһендә осрашып, бер-береһенә ҡул бирергә тейеш ине. Осрашҡас, нимә эшләргә тейешлектәрен алдан әйтмәһәм дә, улар бер-береһенә ҡул бирерҙәренә ышана инем. Жәүәт ағайҙы Рейхстаг башына мендерермен, тип уйлағайным. Ул унда: "Мин - Өфөнән Жәүәт, ҡасандыр Берлинды алдым, санкцияларығыҙ менән илдәр араһындағы тыныслыкты бутап, аҡылһыҙланмағыҙ", - тип яҙыр ине. Киноның бер вариантын тапшырҙым, унда геройҙарым осрашманы. Тик был фильмды мин BBC өсөн дә эшләйем, шуға ул вариантында, бәлки, осрашырҙар ҙа. Фильмды төшөргән саҡта Өфөлә Жәүәт ағайҙың өйөндә йәшәнем. Ул бик яҡшы физик формала, күнегеүҙәр эшләй, башҡорт рухы көслө унда. Ҡыҫҡырып немец, француз телдәрендә йырҙар йырлай, телдәрҙе әсирлектә өйрәнгән. Рухы көслө булмаһа, шул тиклем ауырлыҡтарҙы еңә лә алмаҫ ине ул.

### Маңҡортлоҡтан һаҡланайыҡ

Һуңғы мәлдә халыҡтың данлы тарихы менән генә йәшәргә ярамай, тигән фекерҙе йыш ишетәм. Был ҙур хата. Тарих - ул статистика түгел, ул көс бирә торған нәмә. Беҙ бөгөн матур йәшәһен өсөн ата-бабалар ҡан түккән. Был турала онотоу оло енәйәт. Тарихыңды, йоланды белмәйһең икән, һин буш кеше, һабын ҡыуығы. Кеше ошо ерҙә тороп, ошо тарихтарҙы белгәндә генә бар һәм буласаҡ. Шуға ла тарихыбыҙҙы башҡалар белһен өсөн дә күп нәмә эшләргә кәрәк бөгөн. Икенсе Бөйөк Ватан һуғышын ғына алығыҙ - ниндәй ҡорбандар биреп яуланған тыныслыҡ. Ошоларҙы онотабыҙ икән, беҙҙең андарыбыҙҙы яулап аласаҡтар, беҙ маңҡортҡа әйләнәсәкбеҙ.

Беҙҙең халҡыбыҙ фольклорға бай, мәғлүмәт андарҙа, хәтерҙә генә түгел, һауала, ерҙә, һыуҙа ла һаҡлана. Телебеҙҙе түбән хәлдә лә, мәҙәниәтебеҙҙе тыя алмаясаҡтар, шул бейеү-йырҙарыбыҙ ҙа мәғлүмәт сығанағы бит. Ошоларҙы уйлаһаң, башҡорт сәнғәтенең, башҡорт киноһының киләсәге үҙ булырға тейеш. Киностудия ла яңы ғына аяҡҡа баҫа. Унда эшләгән талантлы кешеләргә гел һоҡланып ҡайтам. Профессионалдар, донъя кимәлендәге оҫталар, барыһы ла инглизсә белә. Сит каналдар нисек тын алғанын да, нисек артабан үҫешергә кәрәклеген дә күреп-белә улар. Етәксеһе шәп, тырыш, ул үҙе тышҡы ҡиәфәте менән Салауат Юлаевҡа оҡшап тора. Тимәк, башҡорттар тураһында донъяла ишетәсәктәр әле.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Нәсүр Йөрөшбаев әйтеүенсә, бөгөн дә халҡыбыҙҙың ҡурайы, биҙәктәре, башҡа сәнғәт төрҙәре Европа халҡын хайран итә. Рәсәйҙең уртаһында ошондай халыҡ йәшәгәнен, Салауатыбыҙҙы ла беләләр. Тик әңгәмәсебеҙҙең үҙен башҡорттарҙың үҙ тарихына тейешле иғтибар бирмәүе борсой. "Французлдарға ҡаршы нисә башҡорт полкы һуғышыуын да, Германияла башҡорт яугирҙарына һәйкәл тороуын да, хатта мин ун йыл элек төшөргән "Сена өҫтөндә ҡурай моңо" фильмын да белмәйҙәр", - ти ул. Башҡорт рухын күтәреүҙә халҡыбыҙҙың тарихы, мәҙәниәте, ысынлап та, ҙур роль уйнай. Ошо байлығыбыҙҙы ҡәҙерләргә өйрәнәйек.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

ИНТЕРНЕТТАН



# ЕМЕШ-ЕЛӘК...

## мейене һаҡлар

■ Стресс ваҡытында ҡәһүә эсеү ҡатын-ҡыҙҙарға яҡшы тәьҫир итә. Ә бына ир-егеттәр бындай осраҡта үҙенең мейе әүҙемлеге тиҙлеген әкренәйтә генә, тип раҫлай Бөйөк Британия белгестәре. Independent News аңыҡлауынса, был тикшеренеүҙәр барышында асыҡланған. Унда ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһе ябай, икенсеһенә кофеины булмаған ҡәһүә эсергә тәҡдим иткәндәр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ябай ҡәһүә эсеүсе гүзәл заттарҙың мейе әүҙемлеге кофеинһыҙ ҡәһүә эсеүсе ханымдарҙыҡына ҡарағанда күпкә яҡшырған. Ә ир-егеттәр, киреһенсә, мәсьәләләрҙе ауырыраҡ һәм яйыраҡ сискән, мәғлүмәтте лә хәтерендә насарыраҡ ҡалдырған.

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Кәмбрижыш Англия университеттары эксперттары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-өндә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарараланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырыға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Бонн университеты (Германия) ғалимдары асыҡлауынса, окситоцин гормоны ғаиләле ирҙәргә ҡатындарына тоғролоҡ һаҡларға ярҙам итә. Был гормон тәбиғи рәүештә гипоталамуста бүленеп сыға һәм партнерҙар араһындағы ныҡлы мөнәсәбәт өсөн яуап бирә. Был гормон кимәле төрлө кешелә төрлөсә. Эксперимент барышында тикшеренеүселәр ир-егеттәргә (никахта тороусылары ла, тормағандарына ла) составында был гормон булған препарат тәҡдим иткән. Һөҙөмтәләр бик ҡыҙыҡлы ғына килеп сыҡҡан. Ғаиләһе булған ир-егеттәр сит ҡатын-ҡыҙҙарҙы урап тигәндәй ҡаса башлаған, ә ғаиләһеҙҙәр үҙҙәренең ҡылыҡтарын үҙгәртмәгән.

■ Афина университеты ғалимдары ике төркөм ҡатын-ҡыҙҙарҙы сағыштырып ҡараған. Беренсе төркөм 3 ай дауамында йүгергән, икенсеһе шәп итеп атлап йөрөгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар артыҡ килограмдарҙы күберәк ташлаған. Тикшеренеүселәр быны шулай аңлатҡан: кем йүгергән, улар күберәк көс юғалтҡан һәм көн дауамында йышыраҡ ял иткән һәм ашаған. Ә йәйәү йөрөүселәрҙең, киреһенсә, энергияһы ташып барған һәм улар ҡалған ваҡытын да әүҙем үткәргән. Бынан тыш, йәйәү йөрөгәндә көс мускулдарға, ә йүгергәндә быуындарға төшә. Бынан тыш, йәйәү йөрөү ҡан баҫымын да яйға һала. Стэнфорд университетының физиологтары юғары ҡан баҫымы менән яфаланған ҡатын-ҡыҙҙарға көнөнә йәйәү йөрөүҙе 9700 аҙымға еткерергә ҡушҡан. Алты айҙан һуң ханымдар ябығып, ҡан баҫымдары нормаға килгән. Ошондай уҡ тәжрибәне ирҙәрҙә лә үткәреп ҡарағандар. Унда 11 мең ир-егет ҡатнашҡан һәм көнөнә 10 мең аҙым яһай башлағандан һуң уларҙа инсульт һәм инфаркт хәүефе 2 тапҡырға кәмегән.

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Ғаиләлә әсәй кешенең тәмле итеп бешерә белеүе өйгә тағы ла үҙенсә йәм һәм тәм өҫтәй инде ул. Өфө ҡалаһында йәшәүсе Лилиә ЮЛДАШБАЕВА, ашһыу тәмле генә түгел, иң тәүҙә файҙалы булырға тейеш, ти. Һөнәре буйынса иктисадсы Лилиә лә, уның тормош иптәше лә Өфө районының Пенсия фондында эшләйҙәр. Әңгәмәсебеҙ әлеге мәлдә декрет ялында.**

# РИЗЫҠТЫ ҮҘЕБЕҘ БЕШЕРӘЙЕК!



**➔ Тәмле ризыҡтар бешерә белеү ҡатын-ҡыҙҙың төп вазифаларының береһе булһа ла, был һөнәргә лә яйлап өйрәнә кеше. Һине был эшкә нимә дәртләндерә?**

- Бәләкәй саҡтан тәмлетатлы ризыҡтар бешерергә ярата инем. Гәзиттәрҙә, журналдарҙа баҫылған бөтөн кәңәштәрҙе лә ҡырҡып алып, махсус дәфтәргә йөбештерә барам. Хәҙер генә анһат, интернетты асаһың да, теләгән нәмәңде эҙләйһең лә алаһың. Йылайырҙа йәшәйбеҙ, ауылға газ үтмәгән мәл. Берәй бисквит бешерер өсөн дә мейес яғырға кәрәк. Былай ваҡытта әсәйгә өйҙә ашарға бешерешәм, тик бына улар саҡ ҡына өйҙән сығып китһәләр, миндә кулинар дәрте уяна. Әсәйем менән атайым бәләкәй ҡустымды ла алып, өләсәйҙәргә бер-ике көнгә ҡунаҡҡа киткәндә, беҙ һеңлем менән донъя көтөп ҡалабыҙ. Әсәй ҡат-ҡат киҫәтә, икмәк мейесенә ут яҡмаҫҡа ҡуша, сөнки утфәлән сығарып ебәреүҙән ҡурҡа. Мин йә формалар менән газда печеньелар бешерәм, йә мейесте берәй тәмлекәс бешә. Әсәйҙәр ҡайтыуға, һеҙҙең яҡтан тәмле еҫтәр сыҡты, тип, күршеләр уларға әйтеп тә ҡуя. Студент саҡта, шарттар булмағас, бер аҙ тыйылып торҙом. Хәҙер инде ғаиләләле булып, ҡыҙ менән ул үҫтергәс, был шөғөлөм ярап ҡалды. Аш бүлмәм ҙур булһын, тип хыяллана инем, уныһы ла тормошҡа ашты. Тормош иптәшемдең эштән ҡайтыуына төрләндереп ашарға бешерәм. Ашаусылары булһа, ҡатын-ҡыҙ ашарға бешереүҙән бер ҡасан да арымайҙыр ул.

**➔ Магазиндан балаларға бер нәмә лә алмайһыңдыр улай булғас?**

- Бик ҡабалан, ваҡыт булмағанда ғына магазин ризығы алабыҙ. Унан һуң, уларҙың сифаты ла шик тыуҙыра бит. Ҡыҙым артыҡ һайланмай, бутҡаһын да ашай. Улым бутҡа ашамай, шуға ла бутҡанан ҡоймаҡ ҡоям. Итле аш, ит ризыҡтары ярата. Гел ҡыуанам, балаларымдың ҡартатаһы менән ҡартәсәһе лә, олатаһы менән өләсәһе лә бар. Улар беҙгә ныҡ ярҙам итә. Сифатлы ризыҡты ауылдан ебәреп торалар.

Икмәкте лә хәҙер үҙем бешерәм, балаларға ла ныҡ оҡшай. Балалар өсөн ябай ғына печенье рецебы тәҡдим итәйем әле. Ғөмүмән, ризыҡ тәмле генә түгел, мотлаҡ файҙалы булырға тейеш. Шуға ла ҡамырға эремсек ҡушығыҙ. Бала эремсекте шул көйө ашамауы ла бар, ҡамырҙа иһә ул һиҙелмәй. 150 грамм аҡ майға 200 грамм эремсек, 250 грамм он, 100 грамм шәкәр кәрәк була. Туңған майҙы шәкәр һәм эремсек менән ҡатыштыраһың. Он ҡушып, тиҙ генә ҡамыр баҫаһың. Ике сәғәткә һыуыткысҡа ҡуйып торабыҙ. Кистән баҫып, иртән бешерһәң дә була. 3 мм ҡалынлығында йәйеп, печеньелар ҡырҡабыҙ ҙа, 200 градус эҫелектә бешерәбеҙ. 10-15 минуттан әҙер була.

Балалар өйҙә әҙерләнгән туңдырма ла яраталар. 200 грамм эремсекте 0,5 банка ҡуйыртылған һөт менән бер массаға килгәнсе блендерҙа болғатабыҙ. 50 мл һөт өҫтәгәс, тағы болғатабыҙ. Әҙер массаны силикон формаларға ҡойоп, 4-5 сәғәткә туңдырырға ҡуябыҙ.

**➔ Интернет селтәрендә һин бешергән төрлө торт, сәк-сәк, бауырһаҡтарҙың һүрәттәрен дә күргәнем бар. Бәлки, гәзит уҡыусылар менән был затлы ризыҡтарҙы бешереү серҙәрен дә уртаҡлашырһың?**

- Сәк-сәк башҡорт халҡы ҡунаҡсыллығының бер билдәһе инде ул. Эше лә мәшәҡәтле унын. Мин һуңғы арала бауырһаҡ бешерергә өйрәнеп алдым. Күберәк ошо тәмлекәстең рецебын һорайҙар, шуға ла гәзит уҡыусыларға бауырһаҡ бешерергә өйрәтәйек.

Бауырһаҡ өсөн туң йомортҡа алына, тип яҙыла күп ерҙә. Тәжрибәм күрһәтеүенсә, был мотлаҡ түгел. Ҙур ҡунаҡ өсөн булмаһа, 5 йомортҡа етә. Йомортҡаны ныҡ итеп туҡыйһың, балғалаҡ осонда ғына тоҙ, шәкәр, сода өҫтәп, тағы туҡыйһың. Он ҡушып, ҡамыр баҫаһың. Һалма ҡамырынан саҡ йына йомшағыраҡ булырға тейеш. 1 сәғәткә һалып торам. 8-9 мм ҡалынлығында йәйәм, 2-3 см киңлектә ҡырҡып сығаһың. Мин, тиҙерәк булһын, тип, ике ҡаҙанда бер юлы бешерәм. Үҫемлек майына ҡаҙ майы, эс майы өҫтәргә кәрәк. Тәме насарая тип ҡурҡмағыҙ, киреһенсә, тәмлерәк була. Май ҡайнап сыҡҡас, уны һыуытаһың да, ҡамырҙы һалаһың. Ҡаҙ майы өҫтәгәндә майҙы һыуытып тормаһағыҙ ҙа була, ул ҡайнар майҙы һыуыта. Яйлап ҡалҡҡас, утты тоҡандырып, бешерәһең. Мин майға һыуыҡ һыу ҡоям, бауырһаҡ күҙ алдында ҙурайып, бешеп сыға. Даими болғатып торорға ла онотмағыҙ. Тишекле сүмескә һалһаң, әҙер бауырһаҡтың артыҡ майы ағып бөтә. Бауырһаҡты шәкәр сиробы менән болғатам. 2 стакан шәкәргә 1 стакан һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатаһың, 2 балғалаҡ бал өҫтәйһең. Сироптың әҙерлеген белеү өсөн ике ысул бар: һыуыҡ һыуҙа һыуыткысҡа ултыртып торам да, сиропты тамыҙып ҡарайым. Ул һыуҙа шар формаһын алһа, әҙер. Шулай уҡ сиропҡа бауырһаҡтың бер осон тығып, уны икенсе бауырһаҡҡа йәбештереп ҡарарға кәрәк. Әгәр улар йәбешһә - сиробығыҙ әҙер. Сироп ҡайнап етмәһә, бауырһаҡ йәбешмәй, тарҡалып тик тора, етмәһә, еүешләнеүе ихтимал. Бауырһаҡты әстерхан сәтләүеге, махсус биҙәүестәр, шоколад менән биҙәргә була.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ризыҡ уңһын өсөн бисмилланды әйтеп, был эшкә яҡшы кәйеф менән тотонорға кәрәк, ти Лилиә. "Ныҡ арыған сағымда ҡамыр ҡуймайым. Шулай ҙа тәүге тапҡыр бешереп ҡарағанда ҡайны бер нәмәләр уңмауы ихтимал, шуға ныҡышмалыраҡ булығыҙ", - тигән кәңәше лә ярап ҡалыр хужабикәләргә. Үҙең бешергән хәләл ризыҡҡа бер нәмә лә етмәй, аштарығыҙ тәмле лә, файҙалы ла булһын!**

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**яҙып алды.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# СӘЛӘМӘТЛЕК ҠАҒИҘӘЛӘРЕН ҮТӘЙЕК!

**Заман ауырыуҙары башлыса дөрөҫ туҡланмауҙан барлыҡҡа килә, тип иҫәпләйем. Шөкөр, атай-әсәйем экологик яҡтан таҙа ит-майһөт менән тәьмин итеп тора, магазин тәмлекәстәрен артыҡ алырға тырышмайбыҙ, колбаса-сосискиҙарҙы бөтөнләй ҙә алмайым. Икмәк бешереп ултырырға ваҡыт юҡлыҡҡа әҙерәк эсем боша, уға ла бит хәҙер ниндәй генә өҫтәмәләр һалмайҙар. Яңыраҡ Өфөлә бешкән икмәккә ҡамырҙы ла әллә ҡайҙан килтергәндәрен, беҙгә Мәскәү аша ташығандарын белеп аптыраным.**

Балалар ауырығанда ла дарыу бирмәйем. Тәндәрен аҡ шыршы (пихта) майы менән ыуам да, нибулайзер ярҙамында ингаляция эшләйем. Дарыу үләндәре менән бәләкәйҙән ҡыҙыҡһынам, хатта өсөнсө класта "Дарыу үләндәренең башҡортса-русса һүҙлеге" тип, бер дәфтәр ҙә эшләп алғайным. Йәйгеһен әүҙем генә дарыу үләндәре йыйып, йыл дауамында шуларҙы ҡулланабыҙ. Сәйгә лә һалам, ҡыҫҡа курстар менән эсереп тә алам. Үләндәр менән дауалау ысулдарын әсәйем һәйбәт белә. Мейе ултыртыу, ҡот ҡойоу һымаҡ әмәлдәрҙе лә унан эшләтәбеҙ. Өләсәйем бик көслө халыҡ дауалаусыһы булды, уға кеше күп йөрөнө, олатайым да, балалары аяҡ-ҡулын һындырһа, шынаны үҙе һалған, үҙенең дә һуғыштан алып ҡайтҡан яраларын үлән онтағы һибеп үҙе тәрбиәләр булған. Шуға өйҙә берәйһе ауырып китһә, нисектер, ҡурҡып сәбәләнеү юҡ миндә.

Ике ҙур алоэ гөлө үҫтерәм. Алоэны балға һалып, һарымһаҡ менән, киҙеү ҡоторған мәлдәрҙә йә былай ғына иммунитет күтәрергә балаларға ҡалаҡлап ашатам. Ғөмүмән, матурҙар ҙа, һауаны ла таҙарталар, тип, ғаиләбеҙ менән гөлдәр ятатабыҙ. Йоҡлар алдынан ионизатор ҡуйып алабыҙ. Милли ризыҡтарҙан талҡан, ҡорот, ҡыҙыл эремсек, йылҡы ите, ҡаҙы, тултырма - әсәйем һис йыбанмай эшләп, ебәреп тора, мең рәхмәтлемен уға.

Иң ҙур дауаларҙың береһе - мунса, үҙебеҙҙеке булмағас, мөмкинлек сыҡҡан һайын һеңлемдәргә барып, мунса инәбеҙ. Һәр ғаиләнең үҙе генә белгән дауалау һәм һаҡланыу серҙәре булалыр, ғаилә йолалары ла, физик хеҙмәт тә һаулыҡты һаҡлауға булышлыҡ итәлер, тип уйлайым. Мәҫәлән, беҙҙе бала саҡта әллә ни эш эшләтмәһәләр ҙә, бесән сабыуҙан, йыйыу, кәбән ослауҙан, атта һыбай күбә тарттырыуҙан ҡалдырманылар, атайым йыш ҡына йәйәүләп алыҫтағы тауҙарға алып сығып китә ине, шулай сыныҡтырғандарҙыр тип уйлайым.

Ауылыбыҙҙағы бәләкәй йылғала май һымаҡ ҡына йомшаҡ күк балсыҡ бар, компресс эшләргә лә, косметик сара булараҡ та ныҡ файҙалы. Уны һәр ваҡыт өйҙә тотам, кәрәккәндә ҡулланып ебәрәбеҙ. Өйөмдә һөләктәр, ахатин ҡусҡарҙары ла бар. Уларҙың шифалары хаҡында интернетта мәғлүмәт күп, айырым туҡталып тормайым. Шулай уҡ ул йән эйәләрен тәрбиәләшеү, ҡарашыу ҙа балаларға оҡшай, уларҙы тынысландыра, тип уйлайым.

Йәйгелеккә балаларҙы ауылға ебәрәбеҙ, өләсәй-олаталары, ҡартәсәй-ҡартаталары уларҙы балыҡҡа ла, бесәнгә лә, емеш-еләккә лә йөрөтөп, физик һәм психик һаулыҡтары өсөн баһалап бөтөргөһөҙ өлөш индерә. Ҡышҡыһын ял көндәре сана шыуырға, йәй велосипед менән йөрөргә ятабыҙ. Ҡатын-ҡыҙҙың ваҡыты бик юҡ та инде ул, әммә ошондай тәү ҡарашҡа ваҡ-төйәк кенә булып күренгән ғаилә йолаларын даими үтәп барғанда яҡшы ғына һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин, тип уйлайым.

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА,**
**шағирә.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Икенсе сер

**Маҡтау.** Маҡтау йәнде имләй! Күпселек кеше маҡталыр өсөн нимә генә эшләмәй. Улар бер хуплау һүҙен ишетеү хаҡына аҡсаларынан яҙырға, алыҫ юл үтергә, физик йәки психологик уңайһыҙлыҡтарға түҙергә ризалар. Дозаһыҙ йәшәй алмаған наркоман кеүек, улар бөтөн нәмәгә риза. Бер "маҡтау"сыны икенсегә алмаштырып, шулай тоҙаҡҡа эләгә. Бәйлелек ни тиклем көслө, улар шул тиклем үҙ тормоштарынан ваз кисә.

Маҡтау көтөү һәр саҡ үҙеңдең баһаңды һәм әһәмиәтеңде раҫлап тороуға килтерә. Һәр саҡ хаталанып йәки кемдеңдер стандартына тура килмәгән нәмә эшләп, үҙегеҙҙе башҡалар менән сағыштырғанда кәмһетелгән итеп тояһығыҙ. Ваҡиғалар ағышында үҙегеҙҙе ғәйепләйһегеҙ, сөнки эшләргә тейеш булғанды эшләмәйһегеҙ. Һәр саҡ үҙегеҙгә: "Быны бик яҡшы эшләнемме икән?" - тигән һорау бирәһегеҙ. Әммә тормошта гелән яҡшыраҡ эшләргә тырышҡан кешенең башҡаларға ҡарағанда яҡшыраҡ булыу идеяһы барлыҡҡа килә һәм уның хаталары күбәйә бара. Ниндәй генә өлкәлә башҡаларҙан яҡшыраҡ булырға тырышһағыҙ ҙа, һәр саҡ үҙегеҙҙе кәм тояcаҡһығыҙ, сөнки барыбер һеҙҙән яҡшыраҡ кемдер табыласаҡ. Кемдеңдер өйө яҡшыраҡ, кемдеңдер аҡсаһы күберәк, кемдеңдер дәрәжәһе юғарыраҡ, кемдер матурыраҡ һ.б. Был һеҙ бер ваҡытта ла еңеүсе булып сыҡмаясаҡ уйын.

Маҡтау һеҙҙе асыҡ шәкәр һауыты тирәләй әйләнгән себендәр хәленә ҡуя. Был - бала саҡтан ҡалған бәйлелектең, асылыбыҙҙың ата-әсә маҡтауына буйһоноуы сағылышы. Маҡтау һәм яза биреү контролдә тотоу сараһы була. Әгәр үҙебеҙҙе яҡшы тотһаҡ, бүләкләнәбеҙ, әгәр ҡаршылашһаҡ, яза алабыҙ.

Бүләкләү йәки язалау схемаһы төпкө аңыбыҙҙа шул тиклем ныҡлы тамыр йәйгән, автоматик рәүештә маҡтау йәки киҫәтеү йоғонтоһона биреләбеҙ. Бала саҡтағы кеүек, күп ваҡытыбыҙҙы уратып алыусыларға ярарға тырышып, әрәм итәбеҙ.

Маҡтауҙың боҙоусы характеры үҙегеҙҙе ҡылыҡтарығыҙ һәм ғәмәлдәрегеҙ аша күҙаллауҙа сағыла. Әгәр яҡшы ғәмәл ҡылһағыҙ - яҡшыһығыҙ, хаталандығыҙ йәки насар нәмә эшләнегеҙ икән - насарһығыҙ. Һәр саҡ маҡтап тороусы кешенең өмөттәрен аҡламайһығыҙ йәки уның стандарттарына тура килмәйһегеҙ икән, уның алдында үҙегеҙҙе ғәйепле тойоп, үҙегеҙҙе-үҙегеҙ ашай башлайһығыҙ. Һөҙөмтәлә, маҡтаусылар тиҙҙән тормошоғоҙҙоң билдәле өлөшөн контролдә тотасаҡ. Һеҙ уларҙың маҡсатына хеҙмәт иткәндә, улар һеҙҙең ихтыяжығыҙҙы ҡәнәғәтләндерә. Әммә һеҙ бирергә әҙер булғандан йәки теләгәндән күберәкте ала алмаһалар, шунда уҡ маҡтауҙы туҡтатып, ғәйеп тойғоһон тыуҙырырға тырышасаҡтар. Улар шуны яҡшы белә: әгәр һеҙҙә ғәйеп тойғоһо уятһалар, уларҙан маҡтау-хуплау һүҙе ишетер өсөн генә лә барыһына ла әҙер буласаҡһығыҙ.

Әгәр азат һәм үҙ-үҙенә ышанған шәхес булғығыҙ килһә, сит маҡтауҙар һәм хуплауҙар тоҙағынан сығырға тейешһегеҙ. Был емергес ғәҙәттән ҡотолоу өсөн башҡаларҙы үҙегеҙҙән өҫтөн ҡуйыу ғәҙәтенән арынырға кәрәк. Бер кемгә лә аҫтан өҫкә ҡарарға ярамай. Әгәр шулай итеүегеҙҙе туҡтатһағыҙ, тирә-яҡтағыларҙың хуплауына мохтажлығығыҙ юғаласаҡ, уларҙың маҡтауы йәки ғәйепләүе бер ниндәй ҙә әһәмиәткә эйә булмаясаҡ.

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП

**Джавад Нурбахштың 2004 йылда Мәскәүҙең "Амрита-Русь" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Суфыйсылыҡ психологияһы" тигән китабында "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" төшөнсәләренә үҙенсәлекле аңлатмалар бирелә. "Нәфсеһен тыя алған кеше донъя менән идара итеүгә өлгәшә, йөрәк ҡушыуы буйынса йәшәгән кешелә нәфсе һәм матди донъя менән ҡыҙыҡһыныу йәшәй әле. Ә инде нәфсеһенә баш була алмағандар йөрәкте һанға һуҡмай, йөрәген тыңлағандар рухын ишетмәй", тиелә китаптың баш һүҙендә. Китаптың "Нәфсе", "Йөрәк", "Рух" тигән бүлектәрен нигеҙ итеп алып, уларҙың иң ҡыҙыҡ өлөштәрен гәзит уҡыусылар иғтибарға тәҡдим итергә булдыҡ. Һүҙҙе "Нәфсе" бүлегенән башлайбыҙ.**

## НӘФСЕ

Нәфсе кешегә тыумыштан бирелә. Нәфсенең төп билдәһе - кеше, ғәҙәттә, тик үҙе хаҡында ғына ҡайғыртып, оятһыҙ рәүештә үҙенең теләктәрен башҡаларға көсләп таға. Интеллект был осраҡта нәфсенең "аҡыллы ревизоры" вазифаһын башҡара, йәғни нәфсе үҙен ҡәнәғәтләндергән ваҡытта башҡалар һәм йәмғәтселек өсөн зарары булмаған юлдарҙы һәм ысулдарҙы күрһәтә, өйрәтә. Али ибн Талиб нәфсегә шундай аңлатма биргән: "Нәфсе хаҡында һөйләгәндә мин һарыҡтарын йыя алмаған көтөүсе хәлендәмен. Көтөүсе малдарын нисек кенә итеп бер тирәгә өйөрөргә тырышмаһын, һарыҡтары шул тиклем ситкә тарала".

**Нәфсенең бер нисә сифатын билдәләп үтәйек:**

1. Нәфсе - наҙанлыҡ билдәһе. "Наҙандарҙан ситкә тайпыл. Нәфсе - барыһының араһында иң наҙаны һәм тәнҡитләнә торғаны", тигән Әбү Хәмзә Бағдади.
2. Нәфсе - әшәке ҡылыҡтар һәм насар холоҡтар сығанағы. Нәфсене оҙаҡ ваҡыт һауытта тоноп ултырған һыуға ла тиңләйҙәр. Әгәр ҙә уны болғатһаң, бурьяҡлана һәм насар еҫ сығара башлай.
3. Нәфсе - Аллаһы Тәғәләнең асыу ҡоралы. Нәфсе тәбиғәтендә яуызлыҡ тыуҙырыу хәләте бар. Аллаһы Тәғәлә нәфсене кешенең холоҡ сығанағы итеп яралтҡан да, уны төрлө төҫкә әйләндереп торор өсөн Иблесте ҡуйған. "Аллаһы Тәғәләнең асыулы сағын күргән кеше үҙенең нәфсеһенең үҙенә тәьҫирен дә татый", тигән бер аҡыл эйәһе.
4. Нәфсе - янып торған торомбашҡа оҡшаш: ул бер үк ваҡытта матур һәм үҙендә емертеү хәләте лә һаҡлай. Янып балҡыуы үҙенә ылыҡтыра, әммә ҡуҙы яндыра.
5. Нәфсе - ул һынташ. Уға иғтибар итеү һынташҡа, ботҡа табыныуға тиң.
6. Нәфсе тик ялғанда ғына үҙенә тыныслыҡ таба.
7. Нәфсе кешенең эсендә булған саҡта уға Аллаһы Тәғәлә күренмәй.
8. Нәфсенең теләген үтәргә ынтылыу - Аллаһы Тәғәләнең барлығына ышанмауҙың нигеҙен тәшкил итә. Нәфсе һәр саҡ Исламдан ситләшергә тырыша.
9. Нәфсенең тәмен тойоуҙан ләззәтләнгән кеше ысын ләззәттән тәмен тойоуҙан мәхрүм.
10. Йәшереп боттарға, һынташтарға табыныу нәфсенең иң ҡыйратҡыс бойороғонон береһе.
11. Нәфсенең нигеҙендә ҡағиҙәләрҙе боҙоу ята.
12. Нәфсе күп һандағы яуызлыҡ төрҙәрендә ғәйепле.
13. Нәфсе һәр саҡ тыйылған нәмәне теләй. Икенсе яҡтан ҡарағанда, нәфсенең күп һандағы тыйылғандарға ынтылыуы уларҙы шулай нәфселе иткән.
14. Нәфсе - теләктәрҙең ҡоло. Ул кешеләрҙе тән рәхәтлеге алырға ҡоторта, матди байлыҡтарға ымһындыра. "Үҙенең теләген Аллаһы иткән кешене күргәнең бармы?" тип әйтелә Ҡөрьәндә.

**(Дауамы бар).**

БАЛАЛАР ҠОРО

# "ӘЛИФБА"НЫ...

## башҡортса һөйләшкән өсөн яратам

**Мөғжизәләргә ышанмаған кешене лә тылсымға инандырған, күңелдәрҙә яңы өмөт саткылары ҡабыҙған байрам - Яңы йыл етеп килә. Кесеһе лә, олоһо ла мөсәл алышыныу сәғәтенең бөтә уй-хыялдарҙы тормошҡа ашыра алыу көсөнә ышана. Йыл дауамында ниндәйҙер эштәр эшләп, көндәлек ығы-зығынан арына алмай йүгереп йөрөгән ололар Ҡыш бабайҙан нимә һорайҙыр, ә беҙ был юлы Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының Тимерхан Даянов, Байрас Бикбаев, Алтынай Шәрипова һәм Асҡар Фазылйәнов исемле беренсе синыф уҡыусыларынан уларҙың Ҡыш бабайҙан нимә һорауы, Яңы йылға нисек әҙерләнеүе тураһында белештек.**

**➔ Яңы йыл байрамын ни өсөн яраталар икән ул?**

**Байрас:** Башҡаларҙы белмәйем, ә мин бөтә ҡыш миҙгелен нык яратам. Сөнки ҡышҡыһын сана шыуырға, ҡар бәрешеп уйнарға, ҡар күп яуғанда көрттө йырып йүгерергә, боҙлауыҡтарҙа тайырға, Ҡарбабай эшләргә мөмкин. Урамда уйнайһың да уйнайһың, өйгә ҡайтҡы ла килмәй ҡышҡыһын.

**➔ Ҡыш бабай бүләк алып килһен өсөн нимә эшләргә кәрәк һуң?**

**Тимерхан:** Ҡыш бабай һинә бүләк бирһен өсөн үҙең белгән һөнәрҙе күрһәтергә кәрәк. Шуға мин быйыл оҙон ғына бер шиғыр ятларға әҙерләнеп йөрөйөм.

**Байрас:** Мин дә уға быйыл шиғыр һөйләйәсәкмен, йыл буйына алған маҡтау ҡағыҙҙарын күрһәтәм. Бейергә һәм йырларға яратмайым шул, бассейнға ғына йөрөйөм.

**➔ Яңы йыл байрамын нисек ҡаршылайһығыҙ?**

**Алтынай:** Беҙ өйҙә шыршыны матур итеп биҙәп ҡуябыҙ, гирляндалар менән бүлмәләрҙе матурлайбыҙ. Атайыма һәм әсәйемә открытка эшләп әҙерләп ҡуям. Әсәйем тәмле итеп торт, печенье бешерә, туғандарҙы һәм дуҫтарҙы ҡунаҡҡа саҡырабыҙ.

**➔ Гимназияла уҡыу ялҡытманымы? Һеҙгә бында оҡшаймы?**

**Асҡар:** Юҡ, бер ҙә ялҡманым. Тәүге тапҡыр гимназияға уҡырға килгәндә минә ҡайһы саҡта "икеле" ҡуялар ине, хәҙер тик "дүртле"гә һәм "бишле"гә генә уҡыйым. Минә бында математика буйынса төрлө мәсьәләләр сисеп, "бишле" алыуы оҡшай. Бөгөн "Әлифба" дәресенән тексты матур итеп күсереп яҙып, беренсе урын алдым.



**Байрас:** Ҡайһы берҙә минә синыфташтарым уҡытыусының дәрестә һөйләгәндәрен аңларға ҡамасаулайҙар ҙа, һуңынан мине гәйепле итәләр, шундай саҡта гимназиянан ялҡып китәм. Мин үҙем дә күп шаярам инде былай. Иң яратҡан дәресем - математика менән әлифба.

**Алтынай:** Әлифба, рус теле, математика, хеҙмәт дәрестәре шул тиклем нык оҡшай. "Әлифба"ны башҡортса һөйләшкән өсөн яратам.

**Тимерхан:** Уҡыуҙа минә әле "икеле" ҡуйғандары юҡ, сөнки мин насар билдә ҡуймаһындар тип, нык тырышып уҡыйым. Яҡшы уҡыһаң, бик күп нәмәне беләһең, ул саҡта машина эшләргә, самолетта осорға, төҙөүсе булырға мөмкин. Кем күп уҡый, ул хатта Президент була. Ә мин бейек өйҙәр төҙөйәсәкмен.

**➔ Яңы йыл байрамынан һуң ҡышҡы каникулда нимә эшләргә йыйынаһығыҙ?**

**Тимерхан:** Күршеләргә ҡунаҡҡа барам, иптәштәрем менән тышта салки уйнайым (баҫтырыш уйыныноң бер төрө икән), әсәйемә һаутһаба йыуышам, атайыма утын ташырға ярҙам итәм. Эштәр күп буласаҡ.

**Байрас:** Каникул ғына етһен, уйнайым, санала шыуам, һырғалаҡтан һикерәм. Шулай уйнаған саҡта дуҫтарымды йәберләгән малайҙар менән һуғышып та киткәнем бар. Мин бәләкәй саҡта каратэға йөрөгәс, бөтәһенә лә көсөм етә.

**Асҡар:** Каникулда өйгә эштәрҙе эшләп, әҙерләнеп ҡуям...

**➔ Беҙҙең "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына нимә теләр инегеҙ?**

**Байрас:** Балалар бер ҡасан да боҙҙа тайып ҡоламаһын, имгәнмәһендәр. Ә Ҡыш бабай ауырымаһын, сәләмәт булһын һәм бөтә ергә лә ваҡытында өлгөрһөн.

**Тимерхан:** Мин Ҡыш бабай бер ваҡытта ла иламаһын һәм бөтә бәпестәргә лә Яңы йылда уйынсыҡтар алып килһен, тип теләйем

**Алтынай:** Ҡыш бабай ярлы кешеләрҙең дә балаларына уйынсыҡтар алып килһен.

**Асҡар:** Мин әсәйем һәм атайым бәхетле булһын, тип теләйем, Ҡыш бабай ҙа бәхетле булһын. Ә балалар ата-әсәләрен ҡыуандырып, тик "бишле" билдәһенә генә уҡыһын.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Әңгәмәлә ҡатнашҡан уҡыусылар әйтмешләй, кеше үҙен бәхетле итеп тойһон өсөн башҡаларға ярҙам итергә тейеш. Ошоно иҫәпкә алып, Иҫке йылдың һуңғы секундтарын һанап сәғәт теләҙәре һуҡҡанда Ҡыш бабайҙан "Бәхетле булайым", тип һорар урынға, "Кешеләргә ярҙам итер көс бир", тип теләү урынлыраҡтыр, бәлки.**

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

ЫШАНҺАҢ - ЫШАН...

# ЮЛБАРЫҪ МЕНӘН ЭТ - УҢЫР,

## Ат менән кәзә - ялға китер

**Маймыл** мөсәл буйынса "коллега"ларына ниндәй сюрприздар әҙерләне икән, ҡыҫҡаса байҡау яһайыҡ (уҡыусыларыбыҙҙы үҙҙәре тыуған ай билдәләре буйынса йондоҙнамә фараздары менән яңы йылдың тәүге һанында таныштырырбыҙ).

**Сысҡан** өсөн һәйбәт йыл килә. Финанс мәсьәләләренә - һатып алыу, һатыу, аҡса туплау, матди хәлен яҡшыртыу буйынса башҡа шундай эштәрегеҙ уңыш килтерер, ләкин урынһыҙ тәүәккәллектәргә бармағыҙ.

**Һыйыр** үҙен бик яҡшы ла, насар ҙа тоймаҫ.Тормошоғоҙҙа ҡаршылыҡтар ҙа, алама күренештәр ҙә булмаҫ. Һеҙҙән бары әүҙемлек һәм тәүәккәллек талап ителә, шул саҡ бөтәһе лә һеҙҙең ҡулдарҙа булыр. Тик ятҡан таш аҫтына һыу инмәҫ, тигәнде онотмағыҙ.

**Юлбарыҫҡа** яңы йыл тик уңыштар ғына вәғәҙәләй. Үҙегеҙҙе ҡайғыртығыҙ, теләктәрегеҙҙе барлап сығығыҙ һәм эшкә лә тотоноғоҙ. Айырыуса аҙаҡҡа ҡалдырып килгән эштәрегеҙҙе йәлағыҙ, маймыл йылында уларҙы хәл итеүе һеҙгә еңел булыр.

**Ҡуяндарға** тыныс йыл килә. Шәхси тормошоғоҙҙо иплəү менән булышығыҙ. Яңғыҙаҡ икәнһегеҙ, үҙ яртығыҙҙы табығыҙ, ғаиләле булһағыҙ - уны нығытыуға көс һалығыҙ.

**Аждаһа** өсөн карьераға юл асылыр. Эшегеҙ буйынса үрләтелеү мөмкинлеге тыуыр йә яңы эш тәкдим ителәр. Маҡсатығыҙға ынтылыусан булығыҙ, әүҙемлек күрһәтегеҙ - һөҙөмтәһе шул тиклем яҡшыраҡ буласаҡ.

**Йыландарға** ҡыйыуһыҙлыҡ һәм баҙнатһыҙлыҡ сифаттарынан арынырға ваҡыт, яңы йылда ул һеҙгә бер ниндәй яҡшылыҡ та килтермәҫ. Аныҡ ғәмәлдәргә күсегеҙ - ниәтләгән маҡсатығыҙға табан ынтылығыҙ, инициатива күрһәтегеҙ, үҙ тормошоғоҙ өсөн үҙегеҙ яуаплылыҡ алығыҙ.

**Йылҡылар** күп йөрөр, сәйәхәт ҡылыр, яңы кешеләр менән бәйләнештәр булдырыр, улар аша яңы перспективалар һәм мөмкинлектәр асылыр. Һеҙгә мотлаҡ ял итеп алыу кәрәк: отпускығыҙҙа шифаханаға юлланығыҙ, унда ла һеҙҙе файҙалы танышлыҡтар көтә.

**Ҡуйҙарға** ла ауыр һәм тынғыһыҙ йылдан һуң ял кәрәк. Уйланығыҙ, үҙ йылығыҙҙан һуң яңы мөсәлгә аяҡ баҫыр алдынан тормоштан ни теләүегеҙҙе аныҡ асыҡлағыҙ, шунан сығып киләсәккә пландар билдәләгеҙ.

**Маймылға** үҙ йылында бер ҙә рәхәт булырға оҡшамай: бик һаҡ "ҡыланырға" тура килер, кәрәкмәгән урында тәүәккәллеккә бармағыҙ. Алтын урталыҡты һайларға кәңәш ителә, көтөлмәгән үҙгәрештәрҙән алыҫ йөрөгөҙ, иҫкегә йәбешеп ятмағыҙ. Аҡыл менән уйлап эш итеү һеҙҙе күп күңелһеҙлектәрҙән ҡотҡарыр.

**Әтәстәргә** был йылды консерватизм сиктәрендә йәшәүе унайлыраҡ буласаҡ. Электән нығынған бәйләнештәр менән файҙаланыуығыҙ хәйерлерәк булыр. Иҫке дуҫтар, яҡшы таныштарығыҙ менән мөнәсәбәттәрегеҙҙе яңыртығыҙ.

**Эттәргә** яңы йылда уңыштар ғына йылмаясаҡ. Ихтимал, мөхәббәтегеҙҙе осратырһығыҙ, яңы эш табырһығыҙ, яңы фатирға, башҡа ҡалаға, хатта икенсе илгә күсеп китеүегеҙ ҙә бар. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: кем тәүәккәлләмәй, шул уңыш тәмен татымай! Ҡыйыуыраҡ тотоноғоҙ: уңыш һеҙҙең ҡулдарҙа.

**Ҡабан** үҙенең тормош биләмәһен төҙөү менән мәшғүл булыр. Ремонт эшләгеҙ, матур интерьер булдырығыҙ. Ер, баҡса өсөн участка һәм, ғөмүмән, ҡаланан ситтә күсемһеҙ милек һатып алыуығыҙ бар.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Декабрь - ғинуар (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (17) дүшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 29 (18) шишәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 30 (19) шаршамбы | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 31 (20) кесе йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 1 (21) йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 2 (22) шәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 3 (23) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26-30 декабрь "Зөбәржәт ҡала тылсымсыһы"** (А. Волков), әкиәт. Башлана 10.30, 13.00, 15.30

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26-27 декабря "Приключения обезьянки Бьянки"** (З. Буракаева), сказка для детей. Начало 12.30, 15.30

**28-30 декабря "Приключения обезьянки Бьянки"** (З. Буракаева), сказка для детей. Начало 10.30, 13.00

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26-30 декабря "Главный новогодний утренник Уфы"**, новогодний праздник. Начало 10.00, 13.00, 15.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**26 декабря "Морозко"**, музыкальная сказка. Начало 10.00, 12.00, 14.00

**27 декабря "Морозко"**, музыкальная сказка. Начало 11.00, 13.00, 15.00

**26-30 декабря "Алладин: тающий песок, или жгучий снег..."** сказка. Время уточняйте в кассе

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**26-30 декабря "Новогодние приключения гостьи из Африки"**. Начало 10.00, 12.00, 14.00, 16.00

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БАРЫҺЫ ЛА БЕЙЕЙ МӘСКӘҮҘӘ



**Мәскәүҙә "Алтын Ай" бейеү ансамбленең концерты үтте. Сара Әҙәбиәт йылына бағышланды һәм унда башҡорт шағирҙары һәм яҙыусыларының әҫәрҙәренән өҙөктәр яңғыраны.**

"Алтын Ай" ансамбле бер нисә төркөмдән тора. Студенттар төркөмө артистары, мәҫәлән, "Стиляги" тип аталған твист, "Каруанһарай" әҙәби-хореографик номер бүләк итте. Башҡорт халыҡ бейеүҙәренән тыш, улар һинд, испан, татар бейеүҙәрен башҡарҙы.

Журналист Гөлнара Ибракова билдәләүенсә, тамашасыға "Алтын Ай"ҙың иң бәләкәй бейеүселәре сығышы ла бик оҡшаған. 5-7 йәшлек бейеүселәр сағыу номерҙар әҙерләгән, "Балалар шатлығы" тип аталғаны айырыуса ҡыҙыҡлы килеп сыҡҡан.

Концертта йәштәр һәм балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә сығыш яһаған. Ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө "Ете ҡыҙ" һәм "Тимербайҙың килендәре" бейеүен башҡарған.

"Алтын Ай" ансамбле 2011 йылда ойошторолған. Ул Мәскәүҙә башҡорт хореография сәнғәте менән шөғөлләнгән беренсе һәм әлегә берҙән-бер коллектив. Ул Мәскәүҙә, Өфөлә үткән фестивалдәрҙә һәм концерттарҙа Башҡортостан Республикаһы исеменән сығыш яһай. Коллектив "Байыҡ" телевизион бәйгеһендә - 3-сө, "Хрустальная туфелька" фестиваленең Гран-приһын яулаған. Коллективтың етәксеһе - бейеүсе һәм хореограф Нәзир Байегетов.

# "КӨМӨШ ҠАЙСЫ" - БЕҘҘЕКЕЛӘРҘӘ

**Мәскәү Хөкүмәтенең ултырыштар залында "Этно-Эрато" милли костюмы юғары модаһы Евразия конкурсы үтте. Өсөнсө тапҡыр уҙғарылған был сарала Рәсәйҙең 39 төбәгенән, Ҡаҙағстандан, Төньяҡ Осетиянан, Үзбәкстандан, Грузиянан, Әрмәнстандан дизайнерҙар һәм модельерҙар ҡатнашты.**



Абруйлы был бәйгелә Башҡортостанды Республика Халыҡ ижады үҙәгенең "Урал" галереяһы коллекцияһы күрһәтте. "Кышлау" тип аталған кейеҙ кейемдәр баһалама ағзалары тарафынан юғары баһаланды. Башҡорт дизайнерҙары "Көнсығыш костюм" номинацияһында - икенсе һәм "Профессиональлек өсөн" номинацияһында конкурстың төп призына - "Көмөш ҡайсы"ға лайыҡ булды.

"Этно-Эрато" милли костюмы юғары модаһы Евразия конкурсы замандың юғары модаһы тенденциялары аша традицион этник костюмдың үҙенсәлектәрен күрһәтергә тырышыуға ҡайтып ҡала. Конкурстың маҡсаты - кейемдәге милли традицияларҙы өйрәнеү, төрлө халыҡтарҙың мәҙәниәтенә һәм сәнғәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

ӘЙҘӘГЕҘ...

# РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

**Һәр йыл аҙағында баҫмабыҙға матур йөкмәтке өҫтәгән, тормош һәм хеҙмәт тәжрибәһе менән ургаҡлашҡан, аҫыл һүҙе, алтын фекере менән гәзитебеҙҙе күтәрмәләгән авторҙарыбыҙҙың исемдәрен атай, уларға рәхмәт әйтә торған йолабыҙ бар.**

Ошо йолабыҙҙы үтәп, халҡыбыҙҙың "Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара", тигән аҡылына ышанып, был юлы ихлас рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе Гүзәл Ситдиҡоваға, Рауил Бикбаев, Рәшит Шәкүр, Мәрйәм Бураҡаева, Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай, Лариса Абдуллина, Зөлфиә Ханнанова, Лена Абдрахманова, Эльза Мөхәмәҙиева, Таңһылыу Бахаутдинова, Айһылыу Ғарифуллина, Гүзәл Исәнгилдина, Радик Өмөтҡужин, Иҙрис Ноғоманов, Әнүәрә Хәйбуллина-Монасипова, Фәүзиә Яхина, Әғләм Шәрипов, Хәлил Һөйөндөков, Мәүлит Ямалетдинов, Урал Мостафин, Нурия Ҡунысбаева, Мөҙәрис Багаев, Фәрзәнә Аҡбулатова, Булат Аҙнабаев, Рәсүл Байгилдин, Рәхимә Мусина, Зилә Ниғмәтуллина, Самат Мөхәмәтйәнов, Айгизә Аҫкарова, Ғиндулла Шәйәхмәтов, Гөлсинә Байғужина, Мотал Рәмов, Шәһүрә Әхмәҙиева, Азалия Илембәтова, Айбулат Псәнчин, Миңһылыу Абдуллина, Хәйҙәр Тапаков, Марат Ишмөхәмәтов, Зөһрә Ҡотлогилдина, Зәкирйән Әминев, Таңһылыу Ҡарамышева, Әкрәм Ҡәйепҡолов, Эдуард Дилмөхәмәтов, Илдар Исламов, Йәмних Ҡашҡаров һәм башҡа авторҙарыбыҙға йүнәлтәбеҙ. Ошо исемлектең артабан да дауам итеүен, төрлө тарафтарҙан рухты, сәмде, ғәмде күтәрер фекерҙәр килеп, гәзитебеҙ биттәренә күсеүен теләйбеҙ. **Барлыҡ авторҙарыбыҙҙы Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ. Күңелдәрегеҙгә - рух, ҡот, тәнегеҙгә - ныҡлы сәләмәтлек, ижад ҡомары теләйбеҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Өфө ҡалаһынан** Әлфиә Мырҙағәлина, Марина Ихсанова, Н. Насирова, **Ейәнсура районы** Малай Муйнаҡ ауылынан Гөлнара Аҡбашева, Аҡдәүләт ауылынан Хәснулла Айсыуаҡов, Исәнғол ауылынан Мәршиҙә Даутова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Зөһрә Ҡарамырҙина, Хәҙисә Мырҙаҡаева, Үргә Иҙрис ауылынан Юлай Мостафин, Рәмзиә Мостафина, **Благовещен ҡалаһынан** Раушания Миңлеәхмәтова, Неля Сәлимова, **Әбйәлил районы** Байым ауылынан Мәрзиә Юламанова, Ғайсар Яҡупов, Аҫҡар ауылынан Зөһрә Йәғәфәрова, Әбйәлил ауылынан Зөһрә Шөғөрова, Салауат ауылынан Илнур Ибраһимов, **Стәрлетамаҡ районы** Рощинский ауылынан Гөлназ Аҫылгәрәева, **Дыуан районы** Арый ауылынан Йәмил Нуриев, **Хәйбулла районы** Иләс ауылынан Фазлыйән Шәрипов, **Ғафури районы** Бәләкәй Үтәш ауылынан Әлфиә Рафиҡова, **Күмертау ҡалаһынан** Вәсилә Ғәбитова, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Ишғәле Нурғәлиев, **Учалы ҡалаһынан** Зилә Ғиззәтуллина, **Ҡыйғы районы** Ибрай ауылынан Светлана Шиһапова, **Йылайыр районы** Ҡаҙырша ауылынан Усман Тәүелбаев һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡайнар ҡотлайбыҙ!

**Барлыҡ хыялдарығыҙ тормошҡа ашһын. Уңыштар, шатлыҡтар кисереп, күтәренке кәйефтә йәшәгеҙ гел!**

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӘМЕР ҮТМӘГӘН ЕРҘӘ...

## хәмер үтә

Ерҙә бер ҡат түйҙырһаң, ул һине ун ҡат түйҙырыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Көслө кеше зарланмайынса ғына ғазаплана, көсһөҙ кеше ғазапланмай ғына зарлана.

**(П. Буаст).**

Ҡатын-ҡыҙға тәбиғәт фәрештә роле биргән, ләкин... тормош уның ҡанаттарын шул тиклем ҡайыра һәм ул һепертекгә ултырып осорға өйрәнә.

**(Тәлғәт Абдрахманов).**

Күпселек изгеләр фәҡир булған, ләкин был бар фәҡирҙәр ҙә изге тигәнде аңлатмай.

**(Уильям Индж ).**

Изге күңеллеләргә кемдәндер уға рәхмәтле булыуы, яман күңеллеләргә уның кемгәлер рәхмәтле булыуы унайһыҙлыҡ тыуҙыра.

**(Фридрих Ницше).**

Рух камиллығын бурысҡа ла, аҡсаға ла һатып алып булмай, һатылғанда ла уны алыусы булмаç ине.

**(Сенека).**

Мохтаждарға ярҙам итмәгән бай кеше ас балаһының сәңгелдәге эргәһендә уҙ түшен имгән имеҙеүсе кеүек.

**(Козьма Прутков).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер егет ғашиҡ була һәм һөйгәнен күреү өсөн күп тапҡырҙар Тигр йылғаһын аша йөҙөп сыға. Ләкин бер саҡ егет ҡыҙҙың йөҙөндә тап күреп ҡала. Ошонан һуң ул йылға аша йөҙгәндә бары тик һөйгәненең йөҙөндәге баяғы тап тураһында ғына уйлай. Уны илһамландырған һөйөү ялҡыны һүрелә һәм ул йылға уртаһында хәлһеҙләнеп, батып үлә.**

**Ысынлап та, ғашиҡ кешенең иғтибарын һөйгәненән бер ни ҙә ситкә йүнәлтә алмаҫҡа тейеш һымаҡ. Был ҡағиҙәне үҙләштергәндәр уҙ һөйгәнен ошолай һынап ҡарай ала. Мәҫәлән, бер ҡыҙ шулай иткән. Уға бер егет һәр саҡ өҙөлөп һөйөүе тураһында һөйләй, уҙ хистәренең тәрәнлеге һәм ихласлығы тураһында ышандырырға тырыша икән. Бер саҡ ҡыҙ уға былай ти: "Мин матур түгел, һин минең һеңләмә генә ҡара әле", - һәм һеңлеһенә төртөп күрһәтә. Егет ул күрһәткән яҡҡа боролоп ҡарай. Ҡыҙыҡай шунда был егеттең һөйөүенең алдатҡыс һәм ихлас булмағанын аңлай..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 5917